*Егеттәр, хәбәрҙар бул замананан,*
*Һыйырҙан артыҡ түгел наҙан әҙәм.*
*Ниңә беҙ хур булабыҙ башҡа йорттан -*
*Беҙ ҙә бит тыуып үҫтек ата-ананан.*

*Мифтахетдин Аҡмулла.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3 - 9 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№18 (592)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Хеҙмәтһеҙ ниғмәт булмай... 3





Алда булһа ҙур теләк... 5


эштән ял таба йөрәк!




Салауат Юлаев исемендәге полк 7





Туҡта, мәл... 8-9


беҙ ижад итәбеҙ!




14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *1 май - Хеҙмәт һәм яҙ байрамы. Хеҙмәт Ер йөҙөндә һәр саҡ юғары баһаланған, ләкин бөгөнгө көндә уның бәҫе төшкән кеүек тойола. Ошо хаҡта фекерегеҙҙе белергә теләр инек.*

***Рәсимә МОСТАФИНА, хаҡлы ялда:*** Минеңсә, әлеге ваҡытта хеҙмәттең бәҫе түгел, ә хеҙмәт кешеһенең баһаһы төштө. Кеше емереп эшләргә һәм тейешле кимәлдә эш хаҡы алырға тейеш. Ҡоро энтузиазмға ҡоролған хеҙмәттең ғүмере оҙон түгел. Шуға күрә, халыҡты эш урындары менән тәьмин итеү, хеҙмәтенә ҡарап лайыҡлы эш хаҡы түләү дәүләттең төп бурыстарының береһе булырға тейеш. Ә хеҙмәттең бәҫе бер ҡасан да төшмәй һәм юғалмай. Тик эш һөймәгән кешенең генә хөрмәте һәм дәрәжәһе булмай. Һәр осорҙа ла егәрле, уңған һәм хеҙмәтте яратыусылар менән бер рәттән, уларҙың елкәһендә йәшәүсе ялҡау, йүнһеҙ, эш рәте белмәгән кешеләр булған, бар һәм буласаҡ. Донъя арбаһын нәҡ егәрлеләр алға алып бара, ә ялҡауҙар үҙҙәренең ошо сифатынан бәхетһеҙлек кисереп, тулы тормош менән йәшәй алмайынса, үҙҙәрен дә, улар менән аралашыу "бәхете" тейгән кешеләрҙе лә яфалай. Тик бының өсөн уларҙы әрләүҙән мәғәнә юҡ, минеңсә, сөнки ялҡаулыҡ - ул кәмселек. Бындай кешене нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк. Эшләргә яратмаған, еңел тормош эҙләгән кешеләр - бәхетһеҙҙәр, сөнки ғәмһеҙлек тәнде лә, мейене лә емерә. Хеҙмәт кешене ҙурлай һәм әхлаҡи яҡтан үҫтерә, байыта.

Совет заманы осоронда халыҡты хеҙмәт берләштерҙе, яҡты киләсәк, ил өсөн тип ал-ял белмәй тир түктек, тырышып эшләнек. Ә бөгөнгө көндә иһә кеше күберәген үҙенең мәнфәғәтен ҡайғырта һәм үҙенең шәхси ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн хеҙмәт итә. Ләкин бының бер хилафлығын да күрмәйем. Әгәр ҙә тырыш хеҙмәт ярҙамында кеше үҙенең тормош-көнкүреш шарттарын яҡшыртһа, балаларына белем биреү яйын тапһа, ял итеү маҡсатында сәйәхәт итеү мөмкинлеген асһа, ғөмүмән, матур тормош ҡороуға өлгәшһә, уның күңеле лә көр, кәйефе лә яҡшы буласаҡ. Ә бәхетле кешеләр йәшәгән илдә насар тормош була алмай.

***Радик ЯҠШЫҒИЛДИН, эшҡыуар:*** Кеше бала саҡтан хеҙмәткә өйрәнергә тейеш. Балаһын хеҙмәткә өйрәтеү - ата-әсәнең тәүбурыстарының береһе, сөнки кеше үҙенең хеҙмәте арҡаһында ихтирам яулай, тормошта үҙ урынын таба. Хеҙмәткә өйрәнмәгән, беләге бәләкәйҙән эш менән нығынмаған кеше оло тормош һынауҙары алдында юғалып ҡалырға мөмкин, ә эш яйын белгән, хеҙмәттән ҡурҡмағандарҙы бер нәмә лә һындыра алмай. Хеҙмәтте бер ҡасан да индәге ауыр йөк итеп ҡарарға ярамай. Һәр эштән йәм табырға һәм рәхәтләнеп эшләргә була. Бөгөн "эш юҡ", тип бәлә һалыусылар күбәйеп китте. Ә шул уҡ ваҡытта ҡала һәм район мәшғүллек үҙәктәрендә тәҡдим ителгән эш урындары эшһеҙҙәр һанынан күберәк. Әлбиттә, унда нефть заводы директоры, газ компанияһы етәксеһе, энергетик ойошманың баш бухгалтеры, университет ректоры кеүек оло вазифалы һәм, шуға ярашлы рәүештә, ҙур эш хаҡы тәҡдим иткән вакансиялар юҡ. Ләкин шул уҡ энергетик компанияға ябай электрсы, университет кафедраһына уҡытыусы йәки лаборантсы талап ителә, тик ул урындарға барыусы кеше юҡ. Бөгөнгө йәш белгестәр директор ултырғысына тиклемге оҙон юлды үтергә теләмәй, уларға бөтә нәмә хәҙер һәм тиҙ кәрәк. Тик тормоштоң үҙ ҡанундары. Һәм улар ҡаты. Ниндәйҙер бейеклеккә күтәрелер өсөн тырышырға һәм ныҡышмалы эшләргә кәрәк. "Хеҙмәттең төбө - хөрмәт" икәнлеген оноторға ярамай.


**(Дауамы 2-се биттә).**


### "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ

# ЮЛДАШ БУЛҺАҢ - ЮЛ УҢА,

## серҙәш булһаң - сер һыя

**"Киске Өфө" гәзитен зыялылар гәзите тиҙәр. Был ниндәйҙер кимәлдә шулайҙыр. Һәр хәлдә, "Киске Өфө"нө мин күңелендә рухиәт, матурлыҡ йөрөткән, тыуған ер, тыуған ил, туған тел кеүек төшөнсәләр бер генә минутҡа, бер генә секундҡа ла уйынан сыҡмаған кешеләрҙең өҫтәл баҫмаһы, тип уйлайым.**

"Киске Өфө" - ул иманлы, инсафлы гәзит, күңелде таҙартыусы, күңелде үҫтереүсе, күңелде күтәреүсе гәзит. Эсең бошоп киткәндә, өҫтөңә сүп-сар һүҙ, ваҡлыҡ, кәмһетеүҙәр ябырылғанда ҡулыңа "Киске Өфө"нө алыуың була, бар насарлыҡтар юйыла, ҡараштар киңәйә, тын алыу иркенәйә, йөрәкте тулыһынса Оло йыһанға торошло Мөхәббәт солғап ала. Бәлки, баҫманы әкиәттәге теге тылсымлы таяҡ менән дә тиңләргә булыр ине. Айырыуса бөгөн - мәңгелек ҡиммәттәр юйыла барғанда, күлдәр ҙә, күңелдәр ҙә бысранған, сер һаҡларҙай, бергәләп "разведкаға барырҙай" ирҙәр ҡалмағанда кәрәк беҙгә был баҫма. "Киске Өфө" менән юлдаш булһаң - юл уңа, серҙәш булһаң - сер һыя.


**(Дауамы 2-се биттә).**




Сибай институты уҡытыусылары.

✓ Ә инде эшен тамамлап, уҡыу йорто бинаһына таҙалыҡ, сафлыҡ ҡундырғандан һуң улар китапханаға юллана һәм ниндәйҙер бер мөғжизә менән осрашҡандай тулҡынланып, ҡулдарына "Киске Өфө" гәзитен ала.



## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**1 май – Хеҙмәт һәм яҙ байрамы. Хеҙмәт Ер йөҙөндә һәр саҡ юғары баһаланған, ләкин бөгөнгө көндә уның бәҫе төшкән кеүек тойола. Ошо хаҡта фекерегеҙҙе белергә теләр инек.**

(Башы 1-се биттә).

**Зөлфәр ЯМАЛОВ, музыкант:** Мин сәнғәт, ижад көҙләгенән сығып фекер йөрөтәм. Тәбиғәттән бирелгән талант, әлбиттә, бик шәп күренеш, ләкин ныҡышмалы хеҙмәтһеҙ был һәләт үҙенең ҡиммәтен юғалта, төҫһеҙләнә, йәмғиәт тарафынан ҡабул ителмәй. Таланты бар тулылығында асылһын өсөн музыкант, рәссам, йырсы һәм башҡа өлкәлә ижад итеүселәр, спортсылар үҙҙәренең оҫталығын йылдар дауамында шымарта, үткерләй, ҡайрай. Ә кем дә кем был ауыр, ләкин мөһим хеҙмәттә инҡар итә, уларға танылыу ҙа, билдәлелек тә килмәй. Сәнғәттә, спортта хеҙмәттең әһәмиәтен аңламаған кеше ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшә алмай. Шуға күрә уңышҡа ынтылғандар хеҙмәттең баһаһын яҡшы белә.

Яратҡан эшең булып, уны бар күңелеңде һалып башҡарыу бәхете барыһына ла бирелмәй. Ҡайһы берәүҙәр был донъяға эшмәкәр түгел, ә хыялдарға бирелеүсән, тормошто күҙәтеп, үҙҙәренсә һығымталар эшләүсе һәм уны төрлөсә итеп яҡтыртыусы булып тыуа. Улар өсөн эш һәм хеҙмәт көстө алыусы, ваҡытты урлаусы, рухи көстө һурыусы булараҡ ҡабул ителә. Ундайҙар рәтенә мин сәнғәт өлкәһендә эшләүселәрҙе индерәм. Күп кенә талантлы кешеләр икмәк-тоҙлоҡ аҡса эшләү өсөн үҙҙәренең характерына, һәләтенә, психологик мөмкинлектәренә тура килмәгән урында хеҙмәт итергә мәжбүр. Улар үҙҙәренә беркетелгән эште башҡара, ләкин күңелдәрендә ҡайнаған ризаһыҙлыҡ, асыу, ҡәнәғәтһеҙлек тойғолары эш сифатының бәкәләнә һуға. Ындай мөнәсәбәттәрҙән хеҙмәткәр ҙә, эш биреүсе лә отола.

Хеҙмәтте ике аспектта ҡарарға мөмкин. Беренсеһе - физик, икенсеһе - аҡыл хеҙмәте. Барыһы ла ташсы, водитель, урмансы һәм башҡа физик хеҙмәт талап иткән эш кешеһе булып бөтә алмаған кеүек, бар донъя философ, шағир, уйлап табыусы, рәссам кеүек физик көс түкмәгән, ләкин ауыр аҡыл эше менән булыусылар менән генә лә тулы була алмай. Шуға күрә һәр кемдең үҙ мөмкинлектәренән сығып, һәләтен һәм оҫталығын ҡулланып эшләүе хеҙмәттең бәҫен төшөрөүгә юл ҡуймаясаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ

# ЮЛДАШ БУЛҺАҢ - ЮЛ УҢА,

## серҙәш булһаң - сер һыя



(Башы 1-се биттә).

БДУ-ның Сибай институты менән "Киске Өфө" гәзите редакцияһы бик күптәнән хеҙмәттәшлек итә. Ысынында, ике коллективты үҙ-ара дуҫ ҡына түгел, ә рухташ тиергә лә була. "Киске Өфө" һымаҡ уҡ, Сибай институты ла үҙенең генә йәшәү рәүеше, моңо, хыялы, үҙенең үҙ пландары, үҙенең генә эске конституцияһы - төп законы булған уҡыу йорто ул. Институт бинаһына аяҡ баҫҡан һәр кем үҙенә ҡарата оло ихтирам, иғтибар ғына тойоп ҡалмай, ә рухи мөхит эсенә инеп китә. Бында ул аҙым һайын башҡорт донъяһының ҡабатланмаҫ үҙенсәлеген раҫлаған, данлаған, милләтебеҙ тарихын сағылдырған күренештәр - һүрәттәр, бюст, композициялар менән осраша. Студенттар уға ихтирам менән сәләм бирә, уҡытыусылар ике ҡуллап килеп күрешеп, хәл белешеп китә, ә техник хеҙмәткәрҙәр иһә уны кәрәкле урынға оҙатып ҡуя. Тәртип шулай ҡуйылған был уҡыу йортонда.

Техник хеҙмәткәрҙәр, тигәндәй. Улар тураһында ла йылы һүҙҙәр әйтеп китке килә. Сөнки уҡыу йортоноң таҙалығы, һауаһының сафлығы, ҡаттарҙағы урман шикелле үҫкән сәскә-гөлдәрҙең торошо нәҡ ошо ябай, итәғәтле, эштәренә үтә лә яуаплы ҡараған хеҙмәткәрҙәр ҡулында бит. Йәштәр менән иң күп аралашыусы, улар менән иң күп һөйләшеүселәр ҙә улар. Кәрәк икән - студенттарға кәңәш бирә, кәрәк икән - ярҙам ҡулы һуҙа, һәр студентты үҙенең балаһы кеүек ҡабул итә, әсәйҙәрсә хәстәрләй, ҡурсалай ул апайҙар. Ә инде эшен тамамлап, уҡыу йорто бинаһына таҙалыҡ, сафлыҡ ҡундырғандан һуң улар китапханаға юллана һәм ниндәйҙер бер мөғжизә менән осрашҡандай тулҡынланып, ҡулдарына "Киске Өфө" гәзитен ала. Ғәҙәттә, был ваҡытта уларҙы берәү ҙә борсорға ҡыймай, сөнки шул тиклем бирелеп уҡый улар гәзитте. Ошо урында был апайҙарҙың исем-шәрифтәрен дә яҙып китәйем әле: бына улар - Зәйтүнә Сүбәрғошова, Рәйсә Йосопова, Минзәлә Мөхәмәтшина, Фәрзәнә Вәлиева, Фәниә Зәйнуллина, Фәйрүзә Моталлапова, Вәлимә Тимербулатова, Алһыу Ишйәрова, Гөлсөм Хәжәбирғәнова, Зөлфирә Ирғәлина. Был апайҙарҙың гәзит уҡығандарына хайран ҡалып ҡарап торғаным булды, хайран ҡалырлыҡ та шул, бөгөн бындай ихласлыҡты, мөкиббән китеп гәзит, журнал, китап уҡыусыларҙы бик һирәк осратаһың. Апайҙар әйтеүенсә, "Киске Өфө"лә уларға төрлө үлөндәр менән дауалау тураһындағы кәңәштәр, йәштәргә, балаларҙы тәрбиәләү буйынса өгөт-нәсихәт оҡшай. Әммә апайҙарҙы айырыуса әҙәби әҫәрҙәр әсир итә. Мәҫәлән, "Мәк сәскәһе" , "Шәүрәкәй", "Ҡуңыр буға" әҫәрҙәрен көтөп алып, үҙ-ара фекер алыша-алыша уҡыны улар. "Ҡайҙан килә ул һеҙҙә гәзиткә булған бындай һөйөү?" - тип һорауым бер көндө уларҙан әкрен генә. "Беҙ бит киләсәк быуын тәрбиәләнгән юғары уҡыу йортонда эшләйбеҙ, шуға бөтә булмышыбыҙ менән бында эшләгән уҡытыусы-тәрбиәселәргә лә, студенттарға ла тап килергә тырышабыҙ. Йүк-юкта йәштәргә аҡыллы фекерҙәр ҙә әйтеп ебәрергә кәрәк, был йәһәттән әлдә "Киске Өфө" гәзите бар елле фекерҙәр менән беҙҙе һуғарырға", - тип яуапланы гәзит уҡыусы апайҙар.

Бына шулай, үҙ фәнен сикһеҙ яратҡан ғалимдарҙы, үҙ эшенә бирелгән уҡытыусыларҙы, киләсәк улар ҡулында икәнен тойған, республика, халҡыбыҙ алдында өсөн яуаплылыҡ йөкмәргә әҙерләнгән студенттарҙы, уларға тап килергә ынтылып торған хеҙмәтләндереүсе персоналды бергә туплаған урын ул Сибай институты. Ә бындай берҙәмлек, дуҫлыҡ, рухиәт мөхите, әлбиттә, уҡыу йорто директоры Зиннур Ғәбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов ихтыяры менән булдырыла. Уның ойоштороу оҫталығы, киң диапазонлы, киң масштаблы фекер йөрөтөүе, тыуған төйәкте, милләтте, туған телде сикһеҙ яратыуы һоҡландыра. Нисек итеп шундай етәксе ҡулы аҫтында насар эшләмәк кәрәк, тип иҫәпләй институт коллективындағы һәр кем.

**Рәүилә ХӘСӘНОВА,**
**Сибай институтының матбуғат хеҙмәте етәксеһе.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Беләбеҙ, Рәсәй почта хеҙмәтенең гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡын саманан тыш юғары күтәреп ебәреүе беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерҙе. Ә шулай ҙа гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтары, аңлы уҡыусыларыбыҙ был ауырлыҡты ла аңлап ҡабул итер, тип ышанып ҡалабыҙ.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, **50673** индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - **246 һумы** ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Волга буйы һәм Урал федераль округтарына инган Рәсәй Федерацияһы субъекттарының һайлау комиссиялары рәйестәре менән семинар-кәңәшмә үткәреү өсөн Өфөгә килгән Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Владимир Чуров менән осрашты. Уның әйтеүенсә, сентябрҙә Рәсәй Федерацияһының 17 субъектында башлыҡ һайлаясаҡтар. Шуға өҫтәп, субъекттарҙың закондар сығарыу йыйылыштарына байтаҡ һайлауҙар, тағы ла бик күп муниципаль һайлауҙар һәм референдумдар үтәсәк. Былар барыһы ла берҙәм тауыш биреү көнөндә тормошҡа ашырыласаҡ.

✓Башҡортостан 20 йыл эсендә беренсе тапҡыр торлаҡ төҙөлөшө күләме буйынса Волга буйы федераль округында лидер булды, 2013 йылда 2,5 млн. $м^2$ торлаҡ төҙөлдө. Был хаҡта БР Президенты Рөстәм Хәмитов 28 апрелдә Өфөлә йыл һайын уҙғарыла торған матбуғат конференцияһы барышында хәбәр итте.

✓"Кроношпан" заводы иң юғары экологик талаптар буйынса төҙөләсәк, ул бик яҡшы һәм хәүефһеҙ, сәнәғәт заводтары тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәүҙең эталоны буласаҡ", - тип билдәләне БР башлығы Рөстәм Хәмитов булып үткән матбуғат конференцияһы барышында. БР Президенты журналистарҙы һәм йәмәғәтселекте, Өфө районы халҡына борсолоу өсөн сәбәптәр юҡ, тип ышандырҙы. Ул шулай уҡ, "Кроношпан" предприятиеһы республиканың урман хужалығында тәртип урынлаштырыуҙа, яңы эш урындары булдырыуҙа ярҙам итәсәк, тип билдәләне.

✓Ҡырымда тормош яйға һалынһын өсөн кәмендә биш йыл кәрәк буласаҡ, - тине Башҡортостан Республикаһы Президенты матбуғат конференцияһы барышында. Уның билдәләүенсә, Ҡырымда йәшәйеш кимәле бик үк бай түгел: һаулыҡ һаҡлауҙа һәм мәғарифта уртаса эш хаҡы 6-7 мең һум. Сәнәғәт, агросәнәғәт производствоһы юҡ, власть инфраструктура менән бәйле мәсьәләләрҙе хәл итмәгән, һыу менән тәьмин итеү насар. Юлдар, энергия ресурстары менән хәл ауыр, газ юҡ. Шул уҡ ваҡытта Рөстәм Хәмитов, Башҡортостан тотош Ҡырымдың, атап әйткәндә, Белогорск районының иҡтисадын тергеҙеү буйынса яуаплылыҡты тулыһынса үҙенә алмай, тип билдәләне.

✓Май байрамдары ваҡытында Башҡортостанда ярайһы йылытасаҡ. Урыны менән көндөҙ плюс 20 градусҡа, төндә 8 градусҡа тиклем йылы буласаҡ, тип хәбәр итә Рәсәй Гидрометеорология үҙәге. Республика буйынса бер аҙ яуымтөшөм булыуы ла көтөлә.

КӨНАУАЗ

**Рәсәй территорияһында беренсе тапҡыр 1 Май байрамы 1890 йылда Варшава ҡалаһында ойошторола. Шунан алып йыл да был маевкалар гел үткәрелә килде. Совет осоронда Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙаны был байрамды үткәреүҙең төп урынына әйләнгәйне. СССР тарҡатылып ебәрелгәс, 1990 йылдан башлап (теүәл 100 йылдан һуң) бындай тантаналар туҡтатылды. Быйыл бына Рәсәй етәкселеге профсоюздарға бындай мөмкинлекте яңынан ҡайтарҙы.**

# ХЕҘМӘТЬЕҘ НИҒМӘТ БУЛМАЙ...



Был факттан шундай параллель үткәрергә була: Ҡыҙыл майҙанда ҡаршылаған 1 Май тантаналары барыбер ҙә дәүләттең ябай хеҙмәт кешеһенә булған мөнәсәбәтен күрһәткән бит. Хеҙмәткә булған юғары ихтирам арҡаһында Советтар Союзы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә донъялағы икенсе иҡтисади яҡтан көслө төбәккә әйләнде, Бөйөк Ватан һуғышында еңеп сыҡты, беренсе булып йыһанды яуланы. Ә яңы Рәсәй ошо совет халҡы булдырған байлыҡты, ҡаҙаныштарҙы тейешенсә файҙалана алманы. Беҙ донъяла әле биләгән бишенсе урын башлыса нефть һәм газ ятҡылыҡтары арҡаһында ғына тотолоп килә.

Боронғоларҙың "Байлыҡтың атаһы - хеҙмәт, әсәһе - ер" тигән һүҙҙәре, ниһайәт, дәүләт етәкселәренә лә барып етте шикелле. Тәбиғәт, ер биргән байлыҡтарҙы ғына файҙаланып, етди уңыштар яулап булмай шул. Быны Украина менән бәйле Рәсәйгә ҡаршы санкциялар асыҡ иҫбатланы.

Төрлө финанс пирамидалары, ялған тауарҙар һатыу кеүек хәҙер киң таралып киткән күренештәр иң юғары кабинеттарҙан алып ябай кешегә тиклем бөтәһендә лә эшләмәй генә байып була тигән психология булдырҙы. Бигерәк тә йәш быуын быны тиҙ арала үҙләштерҙе. "От работы кони дохнут" тигән ҡараш хатта мәктәп эскәмйәһенән алып кешенең ҡанына һеңдерелә башланы. Элекке һымаҡ, ағас ултыртып, сөгөлдөр утап, бесән әҙерләп, үҙенә кәрәк-яраҡлыҡ аҡса эшләгән балалар хәҙер юҡ кимәлендә. Ғалимдар иҫбатлауынса, берәй нәмәне - гимнастика яһауҙы, намаҙ уҡыуҙы, берәй эш менән булышыуҙы көндәлек ғәҙәт итеп алыу өсөн баланы кәмендә 60 тапҡыр шөғөлләнергә мәжбүр итергә кәрәк. Хәҙерге мәктәп педагогикаһында был шарт бөтөнләй ҡаралмаған. Дәрескә һуңлап килеү уҡыусылар ғәҙәтенә һеңә бара - киләсәктә был кешенән ниндәй уҡыу, хеҙмәт дисциплинаһы көтөргә була инде?

Хәҙерге йәштәр үҙҙәренең ҡайһы бер тиңдәштәренең мәктәпкә барғаны өсөн бүләккә айфон алғандарын, армия хеҙмәтенән нисек "ҡотолғанын", диплом һатып алғандарын, вуз тамамлағаны өсөн машина йәки фатир бүләк иткәндәрен күреп, хеҙмәттең бер нәмәгә лә кәрәкмәгәнен белеп үҫә: эшлә-эшләмә - һиндә был нәмәләр булмаясаҡ.

Мәктәптә, юғары уҡыу йорттарында уҡыусыларҙың, элекке мәғариф министры Фурсенко билдәләүенсә, өстән бер өлөшө бөтөнләй уҡымай, тик ваҡыт үткәреү өсөн генә йөрөй (ошо контингентты вузда тотҡансы, ПТУ системаһы аша предприятиеларға ебәреү отошлораҡ түгелме икән- мигранттарҙың да кәрәге бөтөр ине). Уҡыу йорттары "хеҙмәт кешеһе" әҙерләү урынына "замана ҡулланыусыларын" ғына тәрбиәләй (Шул уҡ финанс грамотаһы тигән предметты ғына алып ҡарағыҙ). Мәктәпте тамамлаған уҡыусыларҙың 100 проценты тиерлек вуз дипломы алырға тырыша (юғары белем түгел). Рәсәй юғары белемле кешеләр буйынса донъя лидеры булып тора - 1 мең кешенең 620-һе вуз тамамлаған. Был күрһәткескә беҙ тик ошо һуңғы 15 йылда өлгәштек. Ысынында, бөгөн юғары белем мотлаҡ атрибутҡа әйләнде. Студенттар һайлаған профессиялар араһында күпселеге гуманитар йүнәлештә - юрист, иҡтисадсы, дәүләт идараһыһы, шоумен, артист, филолог һ.б., йәғни былар киләсәктә матди байлыҡ булдырыусы һөнәрҙәр түгел. Күпселеге тик офиста ғына ултырып эшләйәсәген күҙаллап йәшәй. Бөтә ҡара эште улар түгел, ниндәйҙер шартлы үзбәк йәки тажик башҡарырға тейеш. Хеҙмәт кешеһе урынына креатив ҡатламға ингәнең хәйерлерәк. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 1980 йылдар уртаһында производствола йәштәрҙең 80 проценты эшләһә, бөгөн тик 33 проценты ғына эшләй, станок артында хәҙер тик "ҡарт гвардия" ғына ҡалды.

Социализмдың төп нигеҙе булған "Кем эшләмәй - шул ашамай" тигән принципты емереүгә Рәсәйҙә үткәрелгән хосусилаштырыу бик ныҡ булышлыҡ итте. Бөтә халыҡ хеҙмәте менән йылдар буйы тупланған мөлкәт ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә власҡа яҡын булған олигархтар ҡулына күсте. Халыҡта, эшләмәйенсә лә бик яҡшы ашап була икән, тигән фекер барлыҡҡа килде. Ошо сирек быуат эсендә баҫыуҙарҙы билсән, әрем, кесерткән, ағастар баҫып алды, заводтар, фабрикалар ябылды, күп фәнни һәм инженер мәктәптәр юҡҡа сығарылды. Иң күп һанлы инженерҙары менән дан алған совет дәүләтендә уҡытыусылар, ғалимдар, инженерҙар сауҙа менән шөғөлләнә башланы. Әйтергә кәрәк, сауҙа тармағы ла яңы байлыҡ булдырмай. Дәүләт етәкселәре нисә йыл инде, беҙгә инженерҙар етешмәй, тип ҡабатлай, баҡтиһәң, уларҙың тик 30 проценты ғына үҙ һөнәре буйынса эшләй, тағы 30 проценты ябай эшсе икән. Медиктарҙың - 80 проценты, математик һәм юристарҙың - 60 проценты, ә агрономдарҙың тик 5 проценты ғына үҙ һөнәре буйынса эшләй. Был мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөнә ышаныуы ла еңелдән түгел, сөнки былтыр Рәсәй хөкүмәтенең вице-премьеры Ольга Голодец "86 миллион эшкә һәләтле кешенең тик 48 миллионы ғына хөкүмәткә күренгән һәм аңлашылған секторҙа эшләй, ә ҡалғандарының ҡайҙа йөрөгәнен беҙ белмәйбеҙ", тине. Ошо 38 миллион кеше пенсия фондтарына бер тин дә һалым түләмәгәс, уларҙың киләсәге бик тә ҡараңғы.

Дәүләттең Хеҙмәт геройы исемен кире ҡайтарыуы менән генә хеҙмәткә булған тейешле ихтирамды ҡайтарып булырмы, тип уйланыла. Быйың өсөн етди үҙгәрештәр талап ителә. Йәмғиәтебеҙҙә хеҙмәт кешеһенә лайыҡлы урын тапмайынса, Рәсәй иҡтисады алдында торған бер генә маҡсатҡа ла өлгәшеп булмаясаҡ икәне көн кеүек асыҡ.

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре**
**кандидаты.**

---

• **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"-нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

• Республика ҡалаларында йәшәүселәр гәзитте почтанан үҙе барып алыу шарты (до востребования) менән **382 һум 50 тингә** яҙыла ала.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Майҙа 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

• **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog. kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Рөстәм Хәмитов журналистар менән осрашыуҙа киләсәк республика президенты һайлауҙарында үҙенең ҡатнашыу ниәте тураһында белдерҙе. Бындай ҡарарҙы ул, уның фекеренсә, һәр кандидатҡа кәрәкле өс нигеҙҙән сығып ҡабул итте, улар: халыҡтың ярҙамы, Рәсәй Президентының ярҙамы һәм дәғүә итеүсенең үҙенең кешеләр мәнфәғәтенә эшләргә теләге. Республика башлығы, был бөтә өс ҡәтғи мөһим сифат тап килгәндә кеше Президентҡа һайланыуға хоҡуҡлы, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓ Башҡортостан Республикаһында өсөнсө тапҡыр "Китапханалар төнө" Бөтә Рәсәй акцияһы үтте. Үҙенсәлекле автоҙар программаларын Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана, Башҡортостан Республикаһының Һуҡырҙар өсөн махсус китапхана, Өфөнөң 12 үҙәкләштерелгән күмәк китапханалар системаһы, баш ҡаланың 17 балалар китапханаһы һәм БР муниципаль райондарының һәм ҡала округтарының 54 үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы әҙерләне.

✓ Өфөнөң Салауат Юлаев проспектында 2014 йылда 420 ябай яҡтыртҡысты 840 энергия һаҡлаусы яҡтыртҡысҡа алмаштырырға планлаштыралар, тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенән. 450 яҡтыртҡыс ҡуйылған да инде. Бынан тыш, бында кабель линияһын алмаштырырға планлаштыралар. Белгестәр билдәләүенсә, яҡтыртҡыстарҙың иҫәбе артыуҙан ҡулланыласаҡ ҡеүәт артмаясаҡ. Шулай уҡ 2014 йылда Бөрө трактында энергия һаҡлаусы яҡтыртҡыстар менән таяуҙар ҡуялар, бөтәһе бергә 280 дана буласаҡ. Өфөлә 2004-2013 йылдарҙа яҡтыртҡыс нөктәләренең иҫәбе ике тапҡырға - 28 меңдән 56,5 меңгә тиклем артты.

✓ Өфө ҡала Советы депутаттары Ҡырым халҡына гуманитар ярҙам ебәрә башланы. Беренсе булып ҡырымдарға финанс ярҙамын - миллион һумды Филүс Ишбулатов күсерҙе. Филүс Ишбулатов - төҙөүсе, "Ағиҙел-ИнвестСтрой" инвестиция-төҙөлөш компанияһы менән идара итә. Ҡаланың депутаттар корпусында өсөнсө йыл эшләй. Ҡырым халҡына аҡса күсереү өсөн иҫәп Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡушыуы буйынса асылды. Әлеге ваҡытта унда дөйөм алғанда 29 миллион һумлап аҡса йыйылды. Аҡсаны республика халҡы һәм предприятиелары күсерә. Республикала шулай уҡ Белогорск районына ярҙам күрһәтеү буйынса штаб ойошторолған.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Өфө - Аэропорт трассаһы буйында урынлаштырылған реклама ҡоролмаларын тәртипкә килтереү, бер ҡанунға яраҡлаштырыу буйынса эшмәкәрлек башланды. Унын барышында ҡуртым ваҡыты үткән щиттар алынасаҡ.*



## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

### БАҠСА АМНИСТИЯҺЫ

Ҡайһы бер төр күсемһеҙ милектәр өсөн баҡса амнистияһына йылдан кәмерәк ваҡыт ҡалды, тип хәбәр итә Росреестр. Кемдәргә ҡабаланырға кәрәк һуң? Баҡса участкаларында шәхси йорт төҙөлөшө тәртибендәге, шулай уҡ шәхси ярҙамсы хужалыҡ алып барыу өсөн һалынған йорттар тураһында һүҙ бара. Быңдай күсемһеҙ милекте ҡыҫҡартылған тәртиптә (баҡса амнистияһы буйынса) 2015 йылдың 1 мартына тиклем генә хосусилаштырып ҡалырға мөмкин. Түбәндәге осраҡтарҙа баҡса амнистияһы сикләнмәй:

- 2001 йылға тиклем, йәғни ғәмәлдәге Ер кодексы индерелгәнгә тиклем, шәхси ярҙамсы хужалыҡ, баҡса хужалығы, баҡсасылыҡ эштәре, шәхси гараж йәки шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн бирелгән ер участкалары өсөн;
- баҡса йорттары һәм капиталь булмаған төҙөлөштәр өсөн.

Аныҡлабыраҡ әйткәндә, дача һәм баҡса ширҡәттәрендәге ер участкалары һәм өйҙәрҙең хужалары һаман булһа ниндәйҙер сәбәптәр менән милекселек хоҡуҡтарын атҡармаған булһа, тейешле документтар уларға 2015 йылдан һуң да биреләсәк.

### ӨЛГӨРМӘҺӘҢ, НИШЛӘРГӘ?

2015 йылдың 1 мартынан һуң ер участкаһында шәхси торлаҡ төҙөлөшө йәки шәхси ярҙамсы хужалыҡ өсөн һалынған йортто хосусилаштырыу өсөн уны файҙаланыуға индереүгә рөхсәт алырға кәрәк буласаҡ. Быныӊ өсөн:

- участка өсөн хоҡуҡты билдәләүсе документтар, участканың төҙөлөш планы, төҙөлөшкә рөхсәт, объектты ҡабул итеү акты (әгәр ул килешеү буйынса төҙөлһә), һалынған йорттоң техрегламент талаптарына яуап биреүен раҫлаусы документтар, объекттың техник шарттарға тап килеүен раҫлаған һәм инженер-техник тәьминәт (электр энергияһы, һыу, канализация, газ) селтәрҙәрен файҙаланыуҙы башҡарыусы ойошмалар ҡул ҡуйған документтар, ер участкаһында йорттоң һәм инженер селтәрҙәрҙең урынлашыуын сағылдырған схема.

### КӨСКӘ ҠАРШЫ - КӨС

Йорт-ҡаралтыңды баҫып инеүсенән һаҡлаған саҡта үҙ именлегеңде яҡлауҙың (самооборона) рөхсәт ителгән сиктәре киңәйтелеүе ихтимал тип көтөлә."Йортом - ҡәлғәм" идеяһы Рәсәй йәмәғәт инициативаһы сайтында 100 мең тауыш йыйҙы, эксперттар тарафынан хупланды һәм хәҙер хөкүмәт ҡарауына индерелергә тейеш. Әлбиттә, Хоҙай ҡушмаһын, ләкин көс ҡулланып йортоңа баҫып инеү осраҡтарына ҡарата киләсәктә рәсми теркәлгән ҡорал ярҙамында шулай уҡ көс ҡулланыу менән яуап биреү мөмкин буласаҡ.

### ЕТЕ ЙӘШТӘН...

Рәсәйҙә ни бары 10 процент самаһы кеше физик культура менән шөғөлләнеп, сәләмәт тормош рәүеше алып бара. Ә бына Италияла, мәҫәлән, ил халҡының - 21, Францияла - 23, Эстонияла 39 проценты әүҙем физкультурник иҫәпләнә.

Әле бына мәктәп уҡыусыларын спорт менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеү мөмкинлеге тыуҙы: ГТО комплексын уңышлы тапшырыу хәҙер вузға ингәндә иҫәпкә алынасаҡ. Ә бына өлкәндәрҙе спортҡа дәртләндереү саралары юҡ. Ошо йәһәттән хөкүмәт сәләмәт тормош рәүешен үҙ итеүселәр өсөн ирекле медицина страховкаһы (ДМС) полистары биргәндә ярайһы ғына ташламалар вәғәҙә итеүсе махсус ҡарар әҙерләй. Мәғлүм булыуынса, ДМС полистары Рәсәйҙең күпселек компанияларының соцпакетына индерелгән, ә уларҙың етәкселәре полистар һатып алыуға сығымдарҙы кәметеү яғында, шунлыҡтан улар хәҙер үҙ эшсәндәрен үҙ һаулыҡтарын үҙҙәренә ҡайғыртыу мәсьәләһен ҡуясаҡ. Бына шул ваҡытта инде ГТО системаһы тулы ҡеүәтенә эшләй башлаясаҡ. Ә ул 11 йәш баҫҡысына бүленгән һәм бөтә эшсәндәрҙе, хатта 70 йәшлектәрҙе лә, спортҡа йәлеп итәсәк.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

### ЮЛДАР ЯҢЫ БИЛДӘ АЛА



**Апрелдең өсөнсө декадаһы башында Өфөнөң юл хеҙмәттәре юлдарға билдәләр һала башланы. Был - транспорт ағымы хәрәкәтен тәртипкә килтереү һәм дөрөҫ ойоштороу, именлек элементы булып тора. Билдәләр юлдың үткәреү һәләтен арттырырға ярҙам итә, юл-транспорт ваҡиғалары һанын 20 - 30 процентҡа кәметеү мөмкинлеге бирә.**

Әлеге ваҡытта эштәр Өфө - Аэропорт юлында һәм баш ҡаланың тарихи үҙәгендә алып барыла. Руль артында ултырыусыларға уңайһыҙлыҡ тыуҙырмау маҡсатында юлдарға билдәләр һалыу кисен, төнөн башҡарыла. Быйыл юлдарҙың айырым участкаларында термопластиктан яһалған билдәләр һалына. Был материал тиҙ туҙмай, тәбиғәттең төрлө күренештәренә, температураның ҡапыл үҙгәреүенә сыҙам, химик матдәләрҙән "ҡурҡмай". Иң мөһиме - ул тәүлектең теләһә ҡайһы ваҡытында ла, тәбиғәттең теләһә ниндәй шарттарында ла күҙгә ташланып торорға тейеш.

### РЕКЛАМАНАН БАШЛАНА



**Театр гардеробтан башланһа, Башҡортостандың баш ҡалаһы уға яҡынлашҡан территориянан уҡ башланырға тейеш. Ғәҙәттә, ҡунаҡтар ғына түгел, баш ҡала халҡы үҙе лә, тәү сиратта, уның юлдарының торошона, территорияның төҙөк һәм таҙа булыуына, юл күрһәткестәренә иғтибар бирә. Шулай ҙа ҡалаға яҡынлашҡанда күҙгә иң элек рекламалар ташланалыр. Бер ниндәй тәртипкә буйһонмаған, кемгә нисек оҡшай - шулай урынлаштырылған сыбар реклама ҡоролмалары күтәренке кәйефте төшөрөргә лә күп һорамай.**

Ошоно иҫәпкә алып, Өфөлә Өфө - Аэропорт трассаһы буйында урынлаштырылған реклама ҡоролмаларын тәртипкә килтереү, бер ҡанунға яраҡлаштырыу буйынса эшмәкәрлек башланды. Унын барышында ҡуртым ваҡыты үткән щиттар алынасаҡ, реклама конструкцияларының бер өлөшө ҡаланың икенсе райондарына күсереләсәк. Ә инде трасса буйынса ҡалдырылғандары бер рәттә һәм бер-береһенән бер үк алыҫлыҡта буласаҡ һәм улар берҙәм стилдә башҡарыласаҡ. Әлеге ваҡытта Өфө-Аэропорт трассаһында 10 төрлө реклама ҡоролмаһы бар. Улар ГОСТ талаптарына яуап бирмәй һәм аралары 50 метрҙан да кәмерәк. Етешһеҙлекте бөтөрөү өсөн реклама конструкцияларының һаны 64 берәмеккә ҡалдырыласаҡ, уларҙың араһы 150-350 метрғаса "оҙонаясаҡ".

### ТРАМВАЙҘАР ВАҠЫТЛЫСА ЙӨРӨМӘЙ



**Өфөлә трамвай юлдарын модернизациялау быйыл да дауам итә. 1 майҙан Рихард Зорге урамында Спорт һарайы районындағы 500 метрлыҡ юл реконструкцияға ябылды.**

Бында трамвай юлдары Чехияла һәм Европаның башҡа илдәрендә ҡулланылған технология буйынса һалынасаҡ. Уның үҙенсәлектәре хаҡында быға тиклем дә яҙғайныҡ инде, шулай ҙа ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тигәндәй, тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп китеү ҡамасауламаҫ: яңы технология һөҙөмтәһендә трамвайҙар рельстар буйлап бөтөнләй тиерлек тауышһыҙ хәрәкәт итә, ә инде машиналар трамвай юлын киҫеп үткәндә, тиҙлектәрен кәметмәй уҙа ала. Барлыҡ ҡағиҙәләрҙе иҫтә тотоп һалынған трамвай юлдарының ярты быуат самаһы ремонтһыҙ файҙаланылыуы мөмкин. Реконструкция эштәренә бәйле 1 - 18 майҙа Рихард Зорге урамынан 5-се, 10-сы, 18-се маршрут трамвайҙары йөрөмәйәсәк. Әммә халыҡҡа уңайһыҙлыҡтар тыуҙырмаҫ өсөн 11-се һәм 22-се маршрут троллейбустарының, "Дим - 18-се дауахана" маршруты буйынса йөрөүсе маршрут автобустарының һаны арттырыласаҡ.

### КҮҘГӘ - ЯЛ, ЙӘНГӘ - ДАУА



**Баш ҡалала шундай матур йола йәшәп килә - Яҙ һәм хеҙмәт байрамы көнөндә тантаналы шарттарҙа барлыҡ фонтандар эшләй башлай. Быйыл да был йолаға тоғролоҡ һаҡланды.**

Кеше өс нәмәгә ҡарауҙан һис ялҡмай, тиҙәр. Шуларҙың береһе - һыу. Мәғлүм булыуынса, һыу кешегә ыңғай йоғонто яһай. Бәлки, шуғалыр ҙа, Европа парктарында фонтандар клумба һәм газондарға ҡарағанда төп биҙәү элементы булып тора һәм нығыраҡ ылыҡтыра.

Бөгөн баш ҡалала фонтандар һаны өс тиҫтә самаһы иҫәпләнә. Әммә йыл һайын улар арта ғына. Мәҫәлән, былтыр Дим районының Хәҡиҡәт урамындағы аллеяла "Кувшинлы ҡыҙ" фонтаны беренсе тапҡыр асылды.

Йәйге эҫе, томра көндәрҙә сағыу ҡояш нуры аҫтында фонтандарҙан сәсрәгән һыу тамсылары йәйғор төҫтәрен сағылдырған күренеште генә күҙәтеү ҙә - ғүмерҙең кире ҡайтарып булмаған бер мәле. Ә инде таҙа, уңайлы, төҙөк майҙандарҙа, парктарҙа һәм скверҙарҙа ял итеү, дөрөҫөрәге, ял итергә ваҡыт бүлеү һәм теләк булыу - үҙе бер бәхет. Ҡала хакимиәте граждандарҙың көнкүрешен уңайлы итеү өсөн бар көсөн һала һәм ошо йүнәлештә эшләүен нисәмә йылдар дауам итә һәм үҙенде ошо йәмғиәттең бер өлөшө итеп тойоу ҙа күңелгә ҡәнәғәтлек тойғоһо бирә.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Хөкүмәте БР Яҙыусылар союзының республиканың билдәле яҙыусылары һәм шағирҙарының 2014 йылда буласаҡ юбилей даталарын байрам итеү тураһындағы тәҡдимен хупланы. Әҙәби саралар Ә.И.Харисов, Т.Х.Ғирфанов, М.Ш.Сиражетдинов, М.И.Илбаев, Ә.М.Сөләймәнов, Р.Г.Зәғиҙуллин, Р.Ф.Мифтахов, Р.З.Хажиев, Ғ.Ғ.Шафиҡов, Ф.С.Суфияров, С.М.Ғәбиҙуллин, Р.Х.Сәғитов, А.Р.Юлдашбаев, Т.С.Дәүләтбирҙинаның юбилейҙары айҡанлы уҙасаҡ.Яҙыусылар союзына тантаналарҙы Туймазы, Ейәнсура, Бөрйән, Балтас, Ғафури, Ишембай, Мәсетле, Яңауыл һәм Хәйбулла хакимиәттәре менән берлектә үткәрергә кәңәш ителде.

✓2014 йылда Башҡортостандың ауыл хужалығы етештереүселәренә ярҙам итеү өсөн 1,6 миллиард, шул иҫәптән яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүгә 1,1 миллиард һум аҡса бүленгән. Быйыл аграрийҙар баҫыу эштәренә былтырғы менән сағыштырғанда бер аҙға һуңыраҡ тотона.Быйыл яҙғы сәсеүҙе 2055 мең гектар майҙанда башҡараһы бар, уларҙан 1260 мең гектарҙы иген баҫыуҙары биләйәсәк. Ужым культураларының хәле быйыл былтырғыға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ - сәселгән майҙандарҙың 93 проценты "яҡшы" (512 мең гектарға) булараҡ баһалана.

✓Башҡортостан юлдаш каналы Хәрби Дан музейына Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары ҡатнашлығында төшөрөлгән 13 сәғәтлек видеоматериал тапшырҙы. Билдәле булыуынса, телевидение 2009 йылдан алып 22 июндә "Хәтерлә мине" тигән акция үткәрә килде. Ул акция мәлендә халыҡтан һуғышта ҡатнашыусылар тураһында бик күп мәғлүмәт һәм фотографиялар йыйылды. Улар тантаналы рәүештә музейға һаҡлауға тапшырылды.

✓**Санкт-Петербургта "Киләсәк мәктәбе: Рәсәйҙә заман мәктәбен булдырыу проблемалары һәм перспективалары" II Бөтә Рәсәй мәғариф формуы һәм "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы мәктәбе" конкурсының финал өлөшө булып үтте. Конкурс йомғаҡтары буйынса Өфөләге 136-сы башҡорт лицейы "Иң яҡшы милли мәктәп" номинацияһы лауреаты булды, лицей директоры Шәмсулла Хәбибрахманов "Йыл директоры - 2014" иҫтәлекле билдә менән бүләкләнде.**

**Эшләгән - тешләгән, тип бик тапҡыр билдәләгән халҡыбыҙ хеҙмәт тураһында. Һәм был һүҙҙәргә ул бик киң мәғәнә һалған: рәсми эш урының булмағанда ла, теләгең булғанда, хатта күңелең тартҡан шөғөл ярҙамында ла аҡса эшләргә, йәғни уны ризыҡҡа алмаштырырға мөмкин. Шуға ла бөгөн сиртһәң ҡаны сығырҙай ир-аттарҙың, ер емертеп атлап йөрөгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың, эш юҡ, тиеүе ысынбарлыҡҡа тап килмәгәндәй. Әлбиттә, ауыл ерендә эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел, ә бына ҡалалағы хеҙмәт баҙарында хәл-торош нисек икән? Ошо һорауға яуап табыу маҡсатында баш ҡаланың Халыҡтың мәшғүллек үҙәге - йәштәрҙең хеҙмәт биржаһы дәүләт ҡаҙна учреждениеһы директоры Рәзинә НАСИРОВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**



# АЛДА БУЛҺА ҘУР ТЕЛӘК...

## эштән ял таба йөрәк!




**➔ Рәзинә Тимерхан ҡыҙы, бөгөн баш ҡалала халыҡты эш менән тәьмин итеү мәсьәләһе нисек ҡуйылған һәм нисек хәл ителә?**

- Уйлап ҡараһаң, баш ҡалала эш табыуы еңелерәк булырға тейеш кеүек, сөнки күпме ойошмалар, предприятиелар, мәғариф-мәҙәниәт объекттары, коммуналь хужалыҡ учреждениелары һ. б. бихисап. Шуға ҡарамаҫтан, үҙ алдыңа эш эҙләй башлаһаң, миллионлы ҡалала башың әйләнеүе лә мөмкин. Беҙ иһә халыҡтың эҙләнеүен еңеләйтеү маҡсатында мөмкин булғандың барыһын да эшләргә тырышабыҙ, "эш биреүсе - эш эҙләүсе" араһында бәйләүсе, тоташтырыусы звено булып торабыҙ. Өҫөлә беҙҙең учреждение даими нигеҙҙә эшләй. Аҙнаның өс көнөндә: дүшәмбе, шаршамбы, йома - иртәнге ундан киске бишкә, шишәмбе - иртәнге ундан киске һигеҙгә, кесе йома иртәнге ундан киске етегә тиклем эш эҙләүселәрҙе һәм Үҙәктә аккредитация үткән эш биреүселәрҙе ҡабул итәбеҙ. Һәр кесе йома эш эҙләүселәр өсөн вакансиялар йәрминкәһе уҙғарыла. Үҙәктә халыҡты ҡыҙыҡһындырған барлыҡ мәғлүмәт тупланған, шулай уҡ уларға үҙ эшен асыу, мәшғүллек мәсьәләләре буйынса юрист һәм башҡа белгестәрҙең консультациялары бирелә, эш биреүсе менән әңгәмә үткәрелә, бер тапҡыр килгәндә генә эш урыны таба алмағандар иһә үҙенең резюмеһын мәғлүмәт базаһына индерә ала. Шуны ла әйтеп китеү зарур: үҙәктең барлыҡ хеҙмәте лә бушлай күрһәтелә. Әгәр ҙә ошо мәҡәләне уҡығанда кемдәрҙең һорауҙары тыуһа, улар 251-51-55 телефоны буйынса шылтыратып, кәрәкле мәғлүмәт алырға мөмкин.

**➔ Халҡыбыҙҙа шундай матур мәҡәл бар: арбаңды - ҡыш, санаңды йәй әҙерлә. Йәғни ул кәрәкле нәмәне көн еткәс түгел, ә алдан хәстәрләүҙе күҙаллай. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, мәктәп уҡыусылары менән бәйләнеш булдырылғанмы, сөнки уларҙың барыһы ла ҡулына аттестат алыу менән юғары уҡыу йортона инә тип раҫлап булмай...**

- Дөрөҫ, үҙендең профессияңды, һуңынан күпме йылдар үтеүгә ҡарамаҫтан, эх, һөнәрҙе яңылыш һайлағанмын, тип үкенмәҫлек, ә һәр көн эшкә барған һайын күңелеңдә байрам хисе тыуҙырырлыҡ итеп һайлау оло бәхет кенә түгел, ә уңыштың яртыһы, тиер инем. Әммә күпселек баштан уҡ үҙенә тап килгән профессия һайлай алмай. Шуны күҙҙә тотоп, мәктәптәрҙә өлкән синыф уҡыусылары өсөн профориентациялар уҙғарыла. Беҙҙең үҙәктең профориентация буйынса белгестәре тест һөҙөмтәләре буйынса үсмерҙең ҡыҙыҡһыныуы, һәләте, характеры һәм хеҙмәт баҙарындағы перспективаны уйлап артабанғы һөнәри юлды һайларға, һайланған икән, уны саҡ ҡына үҙгәртергә, төҙәтергә ярҙам итә. Бындай хеҙмәт 8-10-сы синыф уҡыусыларына күрһәтелә. Йыл башынан алып профессиональ йүнәлешен асыҡлау буйынса 1480 үсмер мөрәжәғәт итте. Шуларҙың 1058-е - 14-17 йәшлектәр.

**➔ Һин дә мулла, мин дә мулла - атҡа бесән кем һала, ти халыҡ мәҡәле. Бөгөн, һәр ата-әсә балаһына юғары белем бирергә, уларҙы юғары вазифаларҙа күрергә теләй. Ләкин кемдер икмәк тә бешерергә, урам да һеперергә, транспорт менән дә идара итергә тейеш бит...**

- Әлбиттә. Үҙәк мәғлүмәттәренә ярашлы, ғинуар-мартта 1804 эш биреүсе 26,4 мең вакантлы урын тәҡдим итте. Шуларҙың 25,9 проценты - Йәштәрҙең хеҙмәт биржаһына, 74,1 проценты мәшғүллек үҙәгенә тура килде. Тәҡдим ителгән эштәрҙең 81 проценты - эшсе һөнәрҙәре. Аныҡлап әйткәндә, төҙөлөш тармағына арматурасылар, бетонсылар, ташсылар, буяусылар, штукатур-буяусылар талап ителә. Заводтарға иһә - монтажсы, ярҙамсы эшсе, электр-газ менән иретеп йәбештереүсе, электромонтажсы кәрәк. Шулай уҡ автомобиль водителе, йөк тейәүсе, урам һеперeүсе, кондуктор, аш-һыу бүлмәһе эшсеһе, официант оператор, ҡарауылсы, ашнаҡсы, һатыусы, слесарь-сантехник, производство бүлмәләрен йыйыштырыусы талап ителә. Инженер-техник хеҙмәткәрҙәр һәм хеҙмәткәрҙәргә һорау 19 процент тәшкил итә. Бында бигерәк тә администратор, бухгалтер, табип, диспетчер, инженер, кассир, консультант, мастер, төҙөлөш һәм монтаж эштәре мастеры, шәфҡәт туташы, менеджер, ярҙамсы, сауҙа вәкиле, прораб, секретарь, белгес, промоутер, техник, иҡтисадсы, экспедитор кәрәк. 1 апрелгә ҡарата дөйөм ҡала базаһында 14363 вакантлы урын хаҡында мәғлүмәт тупланған. Шулай уҡ квота иҫәбенә физик мөмкинлектәре сикләнгән категорияға 171 урын бар. Уртаса алғанда, бөгөн эш эҙләүсе бер кешегә 1,9 эш урыны тура килә.

**➔ Инвалидтар хаҡында телгә алғас, уларҙың йәмғиәткә яраҡлашыу мәсьәләһенә етекләберәк туҡталып китәйек, булмаһа. Сөнки тормош күрһәтеүенсә, шул уҡ Параолимпиада раҫлауынса, мөмкинлектәре сикләнгән категория, киреһенсә, мөмкинлектәренә сик булмауын бар донъяға күрһәтте. Ахырҙа, дүрт һаны теүәл булыусылар беҙ үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе сикләйбеҙ, тигән фекергә киленә...**

- Был, ысынлап та, шулай. Бөгөн ҡалала бындай категория социаль инфраструктураларға еңел инә алһын, тимер юлы, һауа, һыу, ҡала-ара автомобиль транспорты, элемтә һәм мәғлүмәт саралары менән иркен файҙаланһын өсөн төрлө мөмкинлектәр тыуҙырыла. Беҙҙең үҙәктә иһә 2011 - 2015 йылдарҙы үҙ эсенә алған "Сикләнмәгән мөхит" тип аталған республика программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә пандустар ҡуйыу, санитар бүлмәләр, ишектәрҙең автоматик рәүештә асылыу-ябылыу системалары эшләнде.

**➔ Бер аҙ киләсәккә ҡорған пландарығыҙ менән дә уртаҡлашмаҫһығыҙмы?**

- Артабан да аҙна һайын вакансия йәрминкәләре үткәреүҙе дауам итербеҙ, тип уйлайым. Шулай уҡ йәштәр һәм пенсия йәшенә етеүселәр өсөн дә махсус йәрминкәләр үткәреү иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ. Балалар йорттарында һәм интернаттарҙа тәрбиәләнеүселәр өсөн һөнәр һайлау йүнәлешендәге синыф сәғәттәре, профессиональ һәм юғары уҡыу йорттарының сығарылыш курс уҡыусылары һәм талиптары өсөн "Йәштәр хеҙмәт биржаһы көндәре" ойоштороласаҡ. 21 майҙа иһә Эшһеҙлектән һаҡлау көнө билдәләнә, был датаға ҡарата "Эшсе кадрҙары индустрияһы" тип аталған республика күргәҙмә-акцияһын уҙғарыу планлаштырыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Рәзинә Тимерхан ҡыҙы әйтеп китеүенсә, бөгөн баш ҡалала рәсми рәүештә эшһеҙ тип теркәлгән бер кешегә 1,9 эш урыны тура килә икән, тимәк, проблема эш урындары юҡлыҡта түгел, ә эшләргә теләк булмауҙа. Был хаҡта үҙенең бер шиғырында Эдуард Асадов бик ҡыҫҡа һәм бик тос әйтеп, сәпкә тейҙергән:**
**"В любых делах, при максимуме сложностей**
**Подход к проблеме всё-таки один:**
**Желанье - это множество возможностей,**
**А нежеланье - множество причин".**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Варикоз

❖ 50 грамм ат ҡуҙғалағы сәскәһенә 0,5 л араҡы ҡойорға, йылы ҡараңғы урында ике аҙна төнәтергә, көн һайын болғатып торорға. 3-4 аҙна көнөнә 3-4 тапҡыр 30-40 тамсы эсергә. Йоҡлар алдынан төнәтмәне варикозлы урындарға һөртергә.

❖ 2 ҡалаҡ ҡыр кесерткәненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң бер сәғәт үткәс ярты стакандан әҙерәк күләмдә эсергә. Был дауа сирҙең башланғыс стадияһында ҡулланыла. Дауаланған ваҡытта кипкәр үләненән (сушеница) ванналар эшләп, йоҡлар алдынан аяҡты шуға тығып ултырыу отошло.

❖ 200 грамм бал менән 1 ҡалаҡ эре тоҙҙо болғатырға. Аяҡтағы ауыртҡан веналарға йоҡаҡ ҡына итеп һөртергә, өҫтөнә пергамент ҡағыҙы урарға (целлофан ҡулланырға ярамай!), бинт менән бәйләргә. Компресты 2 тәүлек тотҡандан һуң, 1 тәүлек ял итегеҙ. Дауалау курсы - 9 процедура.

❖ Нығ бешкән помидорҙы йоҡа телемдәргә бүлеп, веналарға һалырға, бинт менән бәйләргә. 3-4 сәғәттән яңынан ҡабатлайһың.

### Ҡан баҫымы сире

❖ 1 ай буйына дарыуханала һатылған әҙер арыҫлан ҡойроғо (пустырник) төнәтмәһен көнөнә 3-4 тапҡыр 30-40 тамсы эсергә. 10 көн дауалангандан һуң тағы ҡабатларға.

❖ Әнәлек емеше төнәтмәһен 30-40 көн буйына көнөнә 2-3 тапҡыр 20-30 тамсы эсергә. Кәрәк булһа, дауаны 10 көндән тағы ҡабатларға.

❖ Әгәр ҙә гипертоник сир атеросклероз фонында барлыҡҡа килһә, балға ҡушып әстерхан сәтләүеге ашарға.

❖ 50 грамм яңы һыуылған ҡара мышар һутын көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 40 минут алда, йәки ашағандан һуң 1-1,5 сәғәт үткәс эсергә. Дауалау курсы - ай ярым. Иҫкәрмә: ҡара мышар һуты ашҡаҙандың сей яраһы ваҡытында ярамай!

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҺАБАНТУЙ

**Яҙын һабан тамамланғас үткәрелә торған байрам - һабантуй башҡорттоң төп байрамдарының береһе булған. Әйткәндәй, борон ул һабанға төшмәҫ элек, беренсе бураҙна йолаһы булараҡ үткәрелгән. XIX быуатта иһә ул киң таралған, күңелле бер байрамдарҙың береһе булып торған.**

Тәүге мәғлүмәттәргә ярашлы, һабантуйҙа бәйгеләр, көрәш, ат сабышы ойошторолған, йырсылар, бейеүселәр сығыш яһаған, ҡыҙҡаһы, тамаша бер нисә көнгә һуҙылған һәм бик күңелле үткән. С. И. Руденко фекеренсә, башҡарылған йолалары, һый табыны буйынса һабантуй туйға яҡын тора. Һабантуйҙа ит бешерәләр, ҡымыҙ, бал һәм сәй әҙерләйҙәр. Ярыштар барған урындан саҡ ҡына йырағыраҡ ҙур ҡаҙандар аҫып, бишбармаҡ бешергәндәр. Итте һәр йорттан йыйылған аҡсаға һатып алалар, йәки берәй бай башҡорт үҙенең малынан бирә. Ит киҫәге (бешкән йәки сей көйөнә) ярышта еңеүсегә бүләк булып та торған. Ул һебә (мөсә) һөйәге тип йөрөтөлгән. Иң шәп йүгереүсегә ҙур киҫәк ит биргәндәр, икенсе килгәненә ҡабырға ите эләккән, өсөнсө урынды алыусыға бәләкәйерәк өлөш сыҡҡан. Көрәш батырына тереләй һарыҡ бүләк ителгән.

Табынға ат ярыштарынан һуң ултырғандар. Хөрмәтле ҡунаҡтарҙы тирмәләрҙә йәки ағас күләгәһенә ҡоролған әүеслектә һыйлағандар. Уларға һабантуйҙа барған бәйгеләр күренеп торған. Ҡалғандар социаль һәм енес бүленешенә ҡарап, төркөмләп ултырған.

Ҡайһы бер көньяҡ-көнбайыш райондарҙа һабантуй мәлендә балаларға сөсө ҡамырҙан бешерелгән ҡумаҫ йәки өшә тарап биргәндәр. Һабантуй алдынан балалар өйҙән-өйгә йөрөп, йомортҡа йыйған. Һабанға төшөр алдынан йәш егеттәр яҡшы аттарға менеп, ауылды урап сыҡҡан һәм һәр өйҙән үҙенә нимәләр һораған. Хужалар уның телөгөн үтәргә һәм бер нисә баш ҡорот бирергә, йәиһә айран, буҙа, әсетке, бал һалынған сынаяҡ һуҙырға тейеш булған. И. И. Лепехин был йоланы һүрәтләп, байрам башланыуы тураһында хәбәр итеүсе егеттәргә йомортҡа бүләк итеүҙәре тураһында яҙа. Ул шулай уҡ үҙенсәлекле уйын - йомортҡа тәгәрәтеүҙе телгә ала. Дәүләкән, Йәрмәкәй райондарында йәшәүселәр әйтеүенсә, йомортҡаларҙы (ҡайһы берҙә ашлыҡ менән бергә бутап) бураҙналарға ташлағандар, балалар уларҙы йыйып ашаған, әөлкән йәштәге ҡатындар теләк телгән: "Әй, Алла, беҙҙең ашлыҡ бөртөктәре ошо балалар ашаған йомортҡалар һымаҡ, эре булып үҫһен ине". Дим буйы башҡорттарында был йола менән бәйле йыр һаҡланып ҡалған:

*Орлоҡ һалғас тубалға,*
*Атайым теләк теләне,*
*Йомортҡалар тәгәрәй,*
*Мин йыямын сүгәләп.*
*Ҡара айғырҙы етәкләп,*
*Мин дә киттем тырматып.*

Ауыл буйлап йомортҡа йыйыу, уларҙы бураҙналарға һибеп сығыу, аҙаҡтан йомортҡа менән һыйланыу ашлыҡ уңышын килтерергә тейеш була.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

МАТУР ХӘТИРӘ



# ИКМӘК ҠӘҘЕРЕ

**Бөгөн шул тиклем етеш тормошта йәшәйбеҙ, хатта беҙҙең өсөн донъяла нимә иң ҡәҙерлеһе икәнен уйлап та ҡарамайбыҙ. Кемгәләр - аҡсаһы, кемгәләр - ҡиммәтле машинаһы, кемгәләр - туны, кемгәләр билгән вазифаһы ҡәҙерле. Ә мине өләсәйем бала саҡтан уҡ донъяла иң ҡәҙерлеһе - икмәк тип өйрәтте. Ул һәр ваҡыт "Икмәк - бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәүләт", ти торғайны. Өләсәйемдән ҡалған бер матур хәтирәне һеҙҙең менән дә бүлешәйем әле, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.**

Бер көн шулай өләсәйем иртәнге намаҙын уҡып бөттө лә, тәҙрә ситенә ҡунып, суҡышы менән быяланы туҡылдатып ултырған ҡарабаш турғайҙы күреп:

- Тәҙрәне турғай суҡый, һөйөнсө һорай. Икмәгем дә унмағайны, ҡунаҡ килер, ахыры,- тип хафаланды. Шул арала кемдеңдер ингән тауышы ишетелде:

- Һаумыһығыҙ!

- Эәэй, Сөррә килгән икән,- тип, өләсәйем урындығынан ялпылдап барып төшә һалып, әллә ҡайҙан килгән таныш түгел ҡунаҡ менән күреште.

- Заһира, ут тоҡандырып, самауыр ҡуйып ебәр, - тине үҙе минә ҡарап. Мин өләсәйемдең беҙгә килеүсе инәйҙәр менән йәнле әңгәмәһен тыңларға яратам. Күптән осрашмаған туғандарҙың һөйләшеп хәбәрҙәре бөтмәй, йөҙҙәре май ҡояшылай йылтырай, өйгә лә ниндәйҙер бер йәм, ҡот кергәндәй булып китә. Әле лә өләсәйемдең Сөррә инәй менән әңгәмәһен тыңлай-тыңлай йөрөп, мейескә ут яғып, самауырға күмер һалып, ашъяулыҡҡа ҡәҙерле ҡунаҡтарына тәғәйенләп һаҡлаған тәмлекәстәрен теҙә башлағайным:

- Иң тәүҙә кеше бисмиллаһын әйтеп, табынға икмәк ҡуя, балам. Икмәк - ул бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәүләт, - тип киҫәтеп тә ҡуйҙы мине. Шул тиклем дә тәмле көртмәле ҡайнатмаһы, ҡарағаттан киптерелгән ҡаҡ, ҡыҙыл эремсек кеүек ризыҡтарҙы өләсәйем батмусҡа һәр ваҡыт икмәктән һуң ғына ҡуйҙыра шул. Балалығым менән өләсәйем әйткән һүҙҙәрҙең айышына ла төшөнөп етмәгәнмендер инде:

- Өләсәйем гел шулай тип әйтә лә торасы, - тип, бер аҙ үпкәләп киткеләгән саҡтарымда әсәйем, иҫе китмәй генә:

- Шулай тип әйтә инде өләсәйең, балам. Ул бит 1921 йылғы йотто күргән, - ти. - Ундай афәтте Хоҙай күрһәтмәһен инде!

Әммә әсәйем йот йылы тураһында тәфсирләп һөйләгәне булманы. Мин алтмышҡа аяҡ баҫып барғанда ғына был осорҙоң ни тиклем ҡот осҡос булғанын Башҡортостан юлдаш телеканалы аша барған тапшырыуҙы ҡарап белдем. Етеш тормошта йәшәп, бер семтем икмәк ашай алмай тилмереп ултырыуҙың нисек була икәнен күҙ алдына ла килтермәйбеҙ икән! Шул саҡта өләсәйемдең өҫтәлдә икмәктең бер валсығын да ҡалдырмай, бармаҡ бите менән сүпләп ашап бөтөрә торған ғәҙәте иҫемә төштө. Ул иртә яҙ менән ихатаға ҡояшҡа бойҙайын йәйеп, хәҙер генә килеп ябырылырға әҙер торған күгәрсендәрҙән һаҡлап, бер бөртөгөн дә туҙҙырмай елгәреп, киптереп ала торғайны. Һуңынан нисек итеп икмәк бешергәнен күрһәгеҙ икән! Өләсәйем ҡамырын өлкән ҡоштабаҡта ағас ҡалағы менән болғай-болғай бар көсөнә таҫҡаганға шулай тәмле бешкәндерме икмәге, әллә ейән-ейәнсәрҙәрен яратып, ҡамырына йөрәк йылыһын ҡушып баҫҡанға шулай ундымы икән? Көндәр буйы, мейес ҡыҙыу булып, икмәгем саҡ ҡына ла көйөп ҡуймаһын, тип һағалап тора торғайны өләсәйем. Бешеп сыҡҡас, әпәкәйенең ҡыртышы алһыуланып ҡына торор ине. Шунан мейестән алған түтәрәмдәрҙең уңып бешкәнме икәнен тикшереп ҡарау өсөн беләгенә һалып, уларҙы саҡ ҡына ырғытып алыр ине. Өләсәйем икмәкте, балаһылай ҡәҙерләп, таҙа сепрәккә төрөп һалып ҡуйыр ине. Берәйһенең күҙе теймәһен, тинеме икән? Өләсәйемдең ана шул икмәге - бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәүләте, бер мейес итеп бешерһә лә, беҙгә бер көнгә лә етмәй ҡала торғайны. Ҡомалаҡ әсеткеһендә бешерелгән мамыҡтай ҡабарып торған ул икмәк тәме әле лә телемдә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Икмәктең бер бөртөк валсығын да ташларға ҡушмаған өләсәйем бөгөнгө заманда ашалып бөтмәгән икмәктең ерҙә аунап ятҡанын, уны малға ашатыуҙарын күрһә, ни тип әйтер ине икән? Тормош тотҡаһы, йәшәү сығанағы, кеше өсөн иң ҡәҙерле ризыҡҡа ҡарата булған мөнәсәбәтебеҙҙе хуплamaҫ ине ул.**

**Зөһрә ЙӘҒӘФӘРОВА-БӘШӘРОВА.**
**Әбйәлил районы Теләш ауылы.**

# АВТОМАТ АЛДЫМ...

**Мин XX быуат кешеһемен. XXI быуат йәштәре мине аңламаҫ кеүек тойолһа ла, бер ҡыҙыҡ хәтирәмде яҙырға булдым.**

Юғары уҡыу йортона уҡырға индем. Рәссам булғым килә минең. Ул һөнәрҙең бөтә нескәлектәрен үҙләштереп, оҫталыҡ туплау - бар хыялым. Әммә ләкин был уҡыу йортонда тарихты, иктисадты ла етди уҡыталар икән. Хатта уларҙың айырым кафедраһы ла бар. Студенттар: "Политический институт с художественным уклоном",- тип тә йөрөтә был факультетты. Беренсе курста КПСС тарихын үттек. Икенсе курста "Политэкономия" фәнен. Ә быуна өсөнсө курста "Научный коммунизм" тип аталған ярты йыллыҡ курс индерелә башланы. Мин был фәнде аңлай алмам, тип, шөрләй төштөм. Коммунизм төҙөлмәгән әле, ә фәне яҙылған... Беҙҙе, социализмда йәшәүсе йәш быуынды: "Һеҙ коммунизмда йәшәрһегеҙ",- тип ышандыралар. Беренсе дәрестә үк иң алғы рәткә барып ултырып, профессорҙың һәр һүҙен йоторға тырыштым. Тик һиҙәм, бер нисек тә аңлап булмай был ҡатмарлы ғилемде. Икенсе аҙнала дәрескә барһам, зал буп-буш тиерлек. Бүтән студенттар ҙа, аңларлыҡ фән түгел, тип тапҡандарҙыр. Был көндә лә уҡытыусының һәр һүҙен йотоп тигеләй тыңланым. Рәссамдар аңларлыҡ фән түгеллеген уҡытыусы үҙе лә беләлер. Беҙҙең баштарыбыҙ матур төҫтәр, гүзәл һындар, композициялар менән тулы бит.

Быуна икенсе дәрес тамамланды. Шул саҡ профессор: "Кем бер тапҡыр ҙа дәрес ҡалдырмаясаҡ, шуға "автомат ҡуям",- тине. Беҙ был һүҙҙәрҙе бөтә факультеттарға тараттыҡ. Тик бер сәғәт буйы аңлашылмаған һүҙҙәрҙе тыңлап ултырыуы ла ауыр бит. Мин ҡыҙҙарға аҡ еп һәм энә һатып алырға тәҡдим иттем һәм уларға селтәр бәйләү алымдарын күрһәттем. Күп ҡыҙҙар был эш менән мауығып китте. Өсөнсө аҙнала зал сағыштырмаса тулы ине. Беҙ, ҡыҙҙар, артҡы рәттәрҙәге урындарҙы биләнек. Уҡытыусы нимәләр һөйләй, ә беҙ тыныс ҡына селтәр бәйләйбеҙ. Беребеҙ ҡулъяулыҡ сите, беребеҙ яға, беребеҙ өҫтәл биҙәй торған кескәй япма бәйләй. Ҡулдарыбыҙ ҡыбырлап торғас, уҡытыусы яҙып ултыралар, тип тә уйлайҙыр. Рәттәр буйлап йөрөп тикшермәй. Дежурный йә староста студент ҡына уға кемдәрҙең дәрестә ултырыуын яҙып бирә.

Быуна семестр тамамланды. Мин зачеткамды тотоп, кафедраға индем. Оло йәштәге профессор кескәй генә, ҡаҡса һынлы, башҡорт милләтле студентҡа ҡарап, ҡаушап ҡалды. Ә мин ғорур ғына тауыш менән "Автомат вәғәҙә иттегеҙ!" тинем. Ул дәресте бер тапҡыр ҙа ҡалдырмаған студенттар яҙылған ҡағыҙға ҡарап уйланды, моғайын, "Ошо кескәй генә башҡорт балаһы "Научный коммунизм" тип аталған ҡатмарлы ғилемде "биш" билдәһенә беләме икән?" тип икеләнгәндер. Шунан уҡытыусы йомшаҡ ҡына тауыш менән: "Усманова, бәлки, һине "дүрт" билдәһе лә ҡәнәғәтләндерер?"- тине (хатта инәлде тип тә була). Ә мин киң йылмайып: "Әлбиттә, ҡәнәғәт булырмын!" - тип шатландым. Профессор минең зачеткаға "дүрт" билдәһен һәм имзаһын ҡуйҙы. Рәхмәт әйтеп, һаубуллаштым. Икебеҙ ҙә ҡәнәғәт ҡалдыҡ. Эйе, сәйәсәт - сәйәсәт менән, ә ул профессорҙы тәрән аҡыл туплаған, тәжрибәле кеше булараҡ рәхмәтле хистәр менән иҫкә алам әле лә. Үҙем аңламаған фәндән "автомат" алғаным өсөн түгел, ә һәр нәмәлә сама белергә, нәфсеңде ҡотортоп ебәрмәҫкә өйрәткән бер бәләкәй генә һабағы өсөн...

**Фәүзиә УСМАНОВА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Билдәле булыуынса, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында Башҡорт АССР-ы үҙенең кеше һәм матди ресурстары менән 6 уҡсылар дивизияһы, 2 уҡсылар бригадаһы, 4 кавалерия дивизияһы һәм күп һанлы артиллерия полктары һәм бронепоездар төҙөй. Башҡортостанда төҙөлгән артиллерия полктары араһында 1292-се танктарға ҡаршы истребитель артиллерия полкы хаҡында айырым әйтеп китергә кәрәк. Дошмандың ауыр техникаһын юҡ итеү өсөн тәғәйенләнгән хәрби часть данлыҡлы юл үтә. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡ: махсус төҙөлгән ошондай полк һуғыш ваҡытында ла, һуңынан да СССР-ҙың башҡа төбәктәрендә булмай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Салауат Юлаев исемендәге полктың төҙөлөү тарихы һәм хәрби юлы әҙ өйрәнелгән. Бөйөк Ватан һуғышы осорон өйрәнеүсе тикшеренеүселәр, гәҙиттә, полктың исемен республикала төҙөлгән хәрби формированиелар рәтендә телгә алыу менән генә сикләнә.**



# САЛАУАТ ЮЛАЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ ПОЛК

## Төҙөлөү тарихы

Полк 1943 йылдың 21 апрелендә Көньяҡ Урал хәрби округы командующийы бойороғо нигеҙендә ойоштоaрола. Бындай хәрби часть төҙөү тураһындағы ҡарар осраҡлы ғына тыумай. Был осорҙа фронтта көсөргәнешле алыштар бара. Көнбайыш Европала икенсе фронт әле асылмағанға күрә, Советтар Союзына фашистик дәүләттәр блогына ҡаршы япа-яңғыҙ һуғыш алып барырға тура килә. Фронттағы өҫтөнлөклө хәлде үҙ яғына ауҙарыу өсөн яңы көстәр, тырышлыҡ талап ителә. Ошо маҡсатта илдең төрлө төбәктәрендә хәрби берәмектәр ойошторола башлай. Башҡортостан да бынан ситтә тороп ҡалмай.

1943 йылдың март айында партия Үҙәк Комитетының хәрби бүлеге партияның өлкә комитетына республика кешеләре һәм матди ресурстары менән тәьмин ителгән ирекле миномет бригадаһы төҙөргә тәҡдим итә. Был тәҡдим урындағы партия органдары, Совнарком тарафынан ҡарала. Йыйылышта Башҡорт АССР-ында танктарға ҡаршы истребитель артиллерия полкы төҙөргә ҡарар ителә. Был полкҡа Салауат Юлаев исеме биреп, уны 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһына беркетеү буйынса талап оборонаның хәрби комиссарына ебәрелә. Был ваҡытта округ командующийы полк төҙөү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуя.

16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһының ойоштороу-штат төҙөлөшө үҙенең составында танктарға ҡаршы бындай хәрби подразделение булыуын күҙ уңында тотмағас, полкты уның составына биреү талабы хупланмай. Әммә Салауат Юлаев исемен биреү тәҡдиме яҡлау таба. Шулай итеп, Көньяҡ Урал хәрби округы, партияның өлкә комитеты, БАССР-ҙың Совнаркомы һәм республиканың хәрби комиссариатының уртаҡ тырышлыҡтары менән полк ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөлөп, кәрәкле ресурстар менән тәьмин ителә. Ойоштоpолғандан һуң, полк Башкомандованиеның резервындағы Салауат Юлаев исемендәге 1292-се танктарға ҡаршы Башҡорт истребитель артиллерия полкы тип атала. Хәрби подразделение ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ойошторола һәм 1943 йылдың 17 июлендә полк командиры майор Кривенцов етәкселегендә Коломналағы артиллерия уҡыу лагерына юллана. Полк Парфентьево ауылы янында 17 ноябргә тиклем ойоштоpолоуҙы һәм әҙерлекте дауам итә.

**Михаил БИКМЕЕВ,**
**тарих фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

**Әлихан Бөкәйханов (Бөкәйхан) XIX быуат аҙағында, XX быуат башында ҡаҙаҡ халҡының хоҡуҡтары өсөн көрәшкән юлбашсыларҙың береһе була. Ул халҡының аянысла яҙмышын тәрәндән өйрәнеп, ауыр хәлдән сығыу юлдарын эҙләй. "Алаш" фирҡәһен ойоштора. Революция башланып киткәс тә Ҡаҙағстандың Ваҡытлы хөкүмәте комиссары итеп ҡуйыла. Октябрь революцияһынан һуң Алаш автономияһын иғлан итеүҙә әүҙем роль уйнай һәм уның рәйесе итеп һайлана. Ул Ҡаҙағстандың беренсе премьер-министры тип иҫәпләнә. 1937 йылда репрессияға эләгеп, атып үлтерелә.**

# ҠАҘАҠТАРҘЫҢ...

## башҡорт тарихынан һабаҡ алғаны

Бөкәйхан Рәсәй империяһының ҡаҙаҡ халҡына ҡарата ҡулланған колониаль сәйәсәтен баштан алып өйрәнә. Бынан тыш, ул Рәсәйҙең башҡа халыҡтарының ауыр яҙмышы менән дә таныша. Бигерәк тә күрше йәшәгән башҡорттарҙың һуңғы быуаттарҙа күргән ыҙаларын, алданыуҙарын, таланыуҙарын тетрәнеп өйрәнә, бер мәл Үҙәк тарафынан ҡаҙаҡтарға ҡаршы ла ошондай уҡ сәйәсәт үткәреләсәген күҙаллай. Шуға күрә лә, шул осорҙа алып барылған ерҙәрҙе ҡаҙналаштырыуҙы күреп, ҡаҙаҡтарҙы нисек тә ерҙәрен юғалтмаҫҡа саҡыра, "Ҡаҙаҡ" гәзите биттәрендә традицион малсылыҡ хужалығынан баш тартыуҙың кире эҙемтәләрен аңлатып, мәҡәләләр баҫтыра.

Бөкәйхан теле, мәҙәниәте, дине һәм хужалыҡ ысулы менән ҡаҙаҡтарға яҡын булған башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрен юғалтыу тарихын ныҡлап өйрәнә. "Ҡаҙаҡ" гәзитендә сыҡҡан "Башҡорт еренең шәжәрәһенән" һәм "Башҡорт ере" мәҡәләләрендә үткән быуаттарҙа башҡорттарҙың ерҙәре нисек итеп тартып алыныуы тураһында бәйән итә. 1863 йылғы закон буйынса, Өфө губернаһындағы һәр бер башҡорт иренә 7 дисәтинә ер бүленә, ә ҡалған бөтә ер "буласаҡ башҡорттарҙың өлөшө" тигән һылтау менән ҡаҙнаға күсерелә. Мәҡәлә авторы фекеренсә, колониаль властарҙың "хәстәре" артында оятһыҙ һәм аяуһыҙ ялған ята. 13 йыл үтер-үтмәҫтән, 1876 йылда 354899 дисәтинә ер (был 400000 квадрат километрҙан күберәк) аукционда баҙар хаҡынан 7-8 тапҡырға осһоҙораҡҡа һатыла. 293 һатып алыусы араһында 19 тайный советниктың, 16 ғәмәлдәге статский советниктың, 25 генералдың, 29 полковниктың, 30 статский советниктың, түбәнерәк дәрәжәләге тағы ла 102 чиновниктың исемдәре лә була. 1910 йылда был ерҙәрҙең 90 проценты дисәтинәһе 28 һум менән икенсе кешеләргә һатыла (был һатып алған хаҡтан 14 тапҡырға юғарыраҡ), ә һатыусы кешеләр үҙҙәре губернанан күсенеп китә. Ошо "эшмәкәр" сановниктарҙы Бөкәйхан "баҙар сиғандарына ҡарағанда ла яманыраҡ (йылғырыраҡ) алдаҡсылар", тип атай. Бынан тыш, урыҫ колониаль императоры 34594 дисәтинә ерҙе үҙенең 11 юғары сановнигына бүләк итә.

Мәҡәләһенең аҙағында ҡаҙаҡ көрәшсеһе: "Хәҙер ошо ас төйлөгәндәр үҙҙәренең туймаҫ танһыҡтарын ҡаҙаҡ ерҙәренә йүнәлтте. Хөкүмәт Дәүләт Думаһына закон проекты индерҙе, уға ярашлы, Себер һәм ҡаҙаҡ далалары... ҡаҙнаға күсәсәк, һәм уларҙы ҡаҙнанан "сиғандар" үҙләштерәсәк", - тип яҙа.

Икенсе ҙур булмаған мәҡәләһендә Бөкәйхан ҡаҙаҡтарға Һамар губернаһы башҡорттары тормошонан ғибрәтле, фәһемле миҫал килтерә (үҙе унда 8 йыл һөргөндә була). Мәҡәлә 1915 йылда "Ҡаҙаҡ" гәзитендә "Башҡорт ере" атамаһы менән сыға. Эпиграф итеп ҡаҙаҡтарҙа киң таралған (башҡорттар араһында ла йыш ҡулланылған) "Ҡыҙым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла" әйтеме алынған.

"Мужикар"ға һәм башҡорттарға үҙ ерҙәре менән ирекле рәүештә ҡулланырға ирек биргән 1906 йылдың 9 ноябрендәге "Столыпин законы" ҡабул ителгәндән һуң, ер эше менән шөғөлләнгән башҡорттар үҙ биләмәләрен һатырға тотона. 1915 йылға башҡорттар күпләп йәшәгән Һамарҙың бар өйәҙҙәрендә, улыҫтарында һәм ҡалаларында улар ерҙәренең дисәтинәһен 13-16 һум менән һатып ебәрә. Ә ерҙең баҙар хаҡы 80-100 һум торған була", - тип яҙа автор. Ошо миҫалды килтереп, "далалар улы" үҙ халҡын ҡәрҙәш башҡорт халҡының хатаһынан ғибрәт алырға саҡыра.

Бөкәйхан үҙ халҡының элекке тормош рәүешен үҙгәртеп, тулыһынса ултыраҡ тормошҡа көсләп күсерелеүенә ҡаршы сығыш яһай (Рәсәй империяһы быны тормошҡа ашыра алмай, әммә Совет власы үткән быуаттың 20-30-сы йылдарында был планды "тормошҡа ашыра"). Ҡаҙаҡ йәмәғәт эшмәкәре иһә, бының өсөн оҙаҡ ваҡыт кәрәк, тип иҫәпләй. Шуға ла ул дәүләттең һәр ғаиләгә бирергә вәғәҙә иткән 15 дисәтинә ерен алыуҙарына ла ҡырҡа ҡаршы була. "Әгәр ғаиләнде 15 дисәтинәлә туйындырам тип уйлайһың икән - бар, ал ул ерҙе! Әммә 15 дисәтинәлә мал тотам тиһәң, һин хаталанаһың, был ахмаҡлыҡ",- тип яҙа ул. Бөкәйхан ҡаҙаҡтарҙы колониаль властың ҡуштандары һүҙҙәренә эйәрмәҫкә ҡуша. Шулай уҡ ҡаҙаҡтар 15-әр дисәтинә ерҙәрҙе алғандан һуң, артып ҡалған ерҙәр мотлаҡ дәүләт ҡаҙнаһына күсерелеп, урыҫ "аристократ-сиғандары" ҡулына күсәсәген фаразлай. "Беҙ башҡорттарҙың аянысла яҙмышында быны күрҙек инде", тип яҙа ул.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ**
**әҙерләне.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Башҡорттарҙың торлағында төрлөлөк күҙәтелә. Урман һыҙатындағы ер эшкәртеүсе халыҡ араһында өйҙәр һәм йорт-ҡура төҙөлөшө өҫтөнлөк итһә, ялан ерҙәрендә малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр тирмәләрҙә йәшәгән. Ғөмүмән, башҡорттарҙың торлағын ике ҙур категорияға бүлергә мөмкин: ваҡытлы һәм даими.

Ваҡытлы торлаҡ тип ябай ғына ҡыуышты әйтергә була. Уның нигеҙен 10-12 өс-дүрт метрлыҡ һайғауҙарҙы ергә ҡаҙап, уларҙың осон бергә бәйләп ҡуйыуҙан барлыҡҡа килгән конус тәшкил итә. Ҡыуыштар сабынлыҡтарҙа, ураҡта, алыҫ баҫыуҙарҙа ҡорола. Был осраҡтарҙа улар тиҙ генә эшләнә һәм бер нисә көнгә тәғәйенләнә. Ҡыуыш төрлө материал: сабынлыҡтарҙа ул үлән йәки бесән, ураҡта һалам йәки көлтә, бик һирәк осраҡта киндер менән ябылған. Әгәр инде оҙайлы ваҡыт йәшәү күҙалланғанда, ҡыуыш бер ни тиклем ныҡлыраҡ итеп ҡорола. Йәйләү урындарында башҡа ҡоролмалар менән бер рәттән, ҡоролған ҡыуыштың төҙөлөш материалы төрлө һәм ҡыҙыҡлы. Конус формаһындағы ҡыуыш (һүрәт) ҡарағас йәки ҡарағай ҡабығы, туҙ менән ябыла. Бик һирәк ҡыуыш тотошлайы менән ҡарағас йәки ҡарағай трансаларҙан торған. Ҡайһы берҙә бер ҡыуышты ҡороу өсөн төрлө материал ҡулланылған: ҡабыҡ, транса, таҡта, һайғау һ.б. (һүрәт).





Ныҡлы булһын өсөн ҡыуыш эске яҡтан бер нисә ағас олоно менән уратыла, туҙлылары йүкә йәки һалабаш менән бәйләнә, ә трансалы ҡыуышҡа йыуан сыбыҡлы бер йәки ике ҡоршау урала. Бындай ҡыуышҡа инеү һәр саҡ рамлы йәки һалабаш менән ныҒытылған ҡабыҡ, туҙ ишек менән ябылған. Ҡыуыш эсе, стена тирәләй ер ҡабыҡ йәки һалабаш менән ҡаплана, уның өҫтөнән йәки ер өҫтөнән балаҫтар, кейеҙ, башҡа төр әйбер йәйелә һәм ғаилә шуның өҫтөндә йоҡлай. Ингән ерҙән уң яҡта хужалыҡ кәрәк-ярағы һәм аҙыҡ запасы һаҡлана, уртала, һыуыҡ көндәрҙә, бер ниндәй ҡулайламаһыҙ, ер өҫтөндә усаҡ яғыла.

Урал аръяғы, ялан башҡорттарының йәйләүендә байҙарҙың ағас тирмәләре менән бер рәттән, уҡбаш тип аталған ҡыуыштар ҙа осрай. Улар конусҡа оҡшаш, кейеҙ йәки балаҫ менән ҡапланған. Бындай ҡыуыштарҙың нигеҙен нәҙек уҡтар (уларҙың ос яғы уҡҡа оҡшаған һәм көмбәҙҙе тотоп тора) тәшкил иткән.

Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының, бигерәк тә Бәләбәй өйәҙе башҡорттарының ҡыуыштарының тәғәйенләнеше бөтөнләй икенсе һәм ул аласыҡ тип атала. Улар һәр саҡ һалам менән көпләнә һәм ҡайһы бер ваҡытта йәйге торлаҡ булып хеҙмәт итә. Уларҙың төп маҡсаты мөгәрәпте йәйге эҫенән һаҡлау булғанға күрә, улар мөгәрәп өҫтөнә эшләнә. Башҡорттарҙа аласыҡ ҡасан барлыҡҡа килгәнен әйтеүе ауыр, әммә уның конус формаһындағы ҡыуышты эске бинаны киңәйтеү маҡсатында үҫеш алыуында бер ниндәй шик юҡ.

***✓ Ә кумирыма килгәндә, мин айырым ғына бер рәссамдың һүрәттәрен, төшөрөү алымын үҙемә өлгө итеп ҡуймайым. Кемдең төшөрөү алымы ҡыҙыҡ тойола, шуны үҙләштереп ҡарарға тырышам.***



# ТУКТА, МӘЛ...

## беҙ ижад итәбеҙ!

**Ысын талант эйәһе бер ваҡытта ла үҙ эшен кеше алдына хөкөмгә сығармай, бүтәндәр менән ярышмай, тиҙәр. Ә шулай ҙа камиллыҡҡа ынтылыш менән бергә кешелә сәм, ярышырға теләк булмаһа, ниндәйҙер юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеп буламы икән? Ярыш һәм ижад тураһында Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты тәрбиәләнеүселәре, "Рәсәйҙең һәләтле балалары: буяуҙар һәм моңдар донъяһында" Бөтөн Рәсәй конкурс-фестивалендә ҡатнашып, Гран-при яулаусы Алмаз Сакаев, төрлө номинацияларҙа беренсе урындар алыусы Айгиз Солтанов, Әлиә Бәҙретдинова, Иҙел Талипов һәм "Яңы мөғжизәләр көткәндә" Бөтөн Рәсәй һынлы сәнғәт конкурсында I дәрәжә диплом менән бүләкләнеүсе Гөлшат Ғәлиева, төрлө конкурстар лауреаты Гүзәл Ханафина менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Әле еңеү яулаған конкурс тураһында һөйләшеп алайыҡ. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән килгән конкурсанттар һеҙҙә ниндәй тәьҫорат ҡалдырҙы? Улар менән үҙегеҙҙе сағыштырып нимә әйтә алаһығыҙ? Тағы ниндәй еңеүҙәрегеҙ бар?**

**Алмаз:** Конкурс Бөтөн Рәсәй буйынса үткәрелде, беҙҙең гимназиянан төрлө йүнәлештәрҙә 25 уҡыусы ҡатнашты. Шарттарға ярашлы, конкурсанттар күргәҙмәгә ҡуйылған предметтар буйынса натюрморт төшөрөргә тейеш ине. Һүрәтте төшөрөп бөткәс, бер-беребеҙҙең эштәрен ҡарап сыҡтыҡ. Беҙҙең конкурсанттарҙың һәр береһенең эше үҙенә генә хас стиле менән айырылып торҙо. Белем биреүсе остаздарыбыҙ беҙгә һәр ваҡыт төрлө стилдә эшләп ҡарарға, һүрәттәрҙе камиллыҡ кимәленә еткереү өсөн тырышырға, ҡулды шымартырға кәрәк, тигән кәңәш бирә, һәм ошо һабаҡтар беҙгә конкурста еңеү яуларға ярҙам иткәндер, тип уйлайым.

**Айгиз:** Эйе, уҡытыусыларыбыҙ беҙгә һәр ваҡыт, "1 процент талант, 99 процент тырышлыҡ кәрәк", ти. Был беҙгә тырышып уҡырға, һынлы сәнғәт нескәлектәрен өйрәнергә ярҙам итеүсе девизға әйләнгән. Әлеге конкурс-фестивалдән тыш, беҙ халыҡ-ара, республика ярыштарында ла әүҙем ҡатнашабыҙ, еңеүҙәребеҙ ҙә бар. Иҫемдә ҡалғандарының береһе - "Салауат Юлаев" хоккей клубы үткәргән "Минең яратҡан хоккей командам" тигән конкурс булды. Хоккейсы Прошкиндың портретын төшөргән өсөн мин дәртләндереүсе иҫтәлекле бүләк алғайным. Шулай уҡ гимназия сиктәрендә йыл һайын "Иң яҡшы йыл уҡыусыһы" бәйгеһе үтә, унда мин былтыр "Иң яҡшы рәссам" номинацияһында билдәләндем, ә Алмаз "Иң яҡшы графист" тип табылды. Гимназияла спорт түңәрәктәре лә әүҙем эшләй. Мин үҙем баскетбол, еңел атлетика менән шөғөлләнәм, был өлкәлә лә еңеүҙәр бар.

**Иҙел:** Әлеге конкурс-фестивалдә мин скульптура яһау бүлегендә ярыштым. Һигеҙ кеше араһында беренсе урын яуланым. Дүрт сәғәт эсендә "Хайуандар донъяһы" темаһына ҡағылышлы һын эшләү йөкмәтелгәйне, пластилин ярҙамында һунарҙан ҡайтҡан айыуҙы һынландырҙым.

**Гөлшат:** Был минең Рәсәй кимәлендәге беренсе ҙур еңеүем. Әле Юрий Гагариндың юбилейына арналған конкурсҡа эшемде тәҡдим иттем, һөҙөмтәләрен көтәм.

**▸ Талантты үҫтереү өсөн камиллашыу теләге генә етәме, әллә башҡаларға ҡарап, ярышмайынса булмаймы?**

**Айгиз:** Конкурс өсөн төшөргәндә, әлбиттә, ярышып эшләйһең. Ә дәрес ваҡытында синыфташтар араһында үҙ-ара ярышыу сәме булһа ла, бер-беребеҙгә ярҙам итешеп йәшәйбеҙ. Мәҫәлән, портрет төшөргәндә берәү күҙҙәрҙе матур, дөрөҫ һынландыра, ә танауы килеп сыҡмай. Был осраҡта уҡытыусыбыҙ урындарҙы алмашып ултырып, бер-беребеҙҙең һүрәтен эшләшергә рөхсәт итә.

**Алмаз:** Дәрестәр өс төргә бүленә: һүрәт, һынлы сәнғәт һәм композиция. Һүрәт һәм һынлы сәнғәт дәрестәрендә натюрморт йәки портрет төшөрәбеҙ. Бөтә класс менән бер үк нәмәне төшөргәндә, әлбиттә, үҙеңдекен иптәштәреңдеке менән сағыштыраһың. Ә композиция дәресендәге сюжетты үҙең уйлап сығараһың һәм унда үҙеңдең эске донъяңды, хис-тойғоңдо сағылдырырға, нимә әйтергә теләгәнеңде аңлатырға кәрәк. Һүрәт төшөрөү дәрестәрендә барлыҡҡа килгән конкуренция иптәштәреңдән бер башҡа өҫтөн тороу маҡсатын алға һөрмәй, беҙгә артабан үҫергә, оҫтарырға этәргес бирә, сәм һәм дәрт өҫтәй.

**Гүзәл:** Гимназияла һынлы сәнғәттең төрлө йүнәлештәре буйынса түңәрәктәр эшләп килә. Уларға йөрөп, витраж, батик, граттаж кеүек ысулдарҙа һүрәт төшөрөргә өйрәнергә була. Унан һуң, йыл һайын гимназия ихатаһында ҡарҙан һындар яһайбыҙ. Быйыл Сочиҙағы олимпия уйындарына арнап, үҙебеҙҙең 8-се "А" класы менән Олимпиада символы - биш түңәрәк эсендә синхрон йөҙөүселәрҙе һынландырҙыҡ. Бик сағыу килеп сыҡты.

**Гөлшат:** Ҡарҙан һындар эшләүҙә беҙ ҙә ихлас ҡатнаштыҡ, ат егелгән санаға айыу ултыртып ҡуйҙыҡ. Скульптурабыҙҙы "Сочиға килеп еттек" тип атарға теләгәйнек, уҡытыусыларға оҡшамаһы ла, ябай ғына итеп "Ат һәм Айыу" исемен бирҙек тә ҡуйҙыҡ. Беҙҙең тырышлыҡ иң юғары баһаға лайыҡ булды. Тимәк, беҙҙең һәр эштә ярыш сәме бар, тимәксемен.

**▸ Ижад һәм илһам бер-береһенән айырылғыһыҙ бит инде ул. Һеҙҙең илһам сығанағы нимә?**

**Алмаз:** Илһамды мин йәшәйештән алам. Көн дә дуҫтар менән аралашаһың, ҡайҙалыр бараһың, нимәлер күрәһең - күҙ алдында, иҫтә ҡалғандарын һүрәт итеп төшөрәһең. Йыш ҡына бала саҡ иҫтәлектәрен һүрәтләйем. Кәйеф булмайынса, дәрестә нимә төшөрөргә белмәй ултырған осраҡта уҡытыусыбыҙ Гапуневичтың мәрәкәләп, шаяртып ебәреүенән дә илһам алам.

**Айгиз:** Һүрәт төшөргөм килмәй китһә, берәй рәссам тураһында, йәки уның һүрәттәре тупланған китапты асып уҡыйым, ҡарайым. Шулай ҡарап ултырғанда күңел күтәрелеп, илһамланып, һүрәт төшөргө килеп китә. Үҙем пейзаждар төшөрөргә яратҡас, Шишкиндың ысынбарлыҡҡа бик яҡын һүрәттәре оҡшай.

**Әлиә:** Көн ҡояшлы булһа, минең һүрәтем дә матур була. Шуға күрә, илһам ҡошом һыуыҡты, ҡараңғылыҡты, һоролоҡто яратмай. Ә кумирыма килгәндә, мин айырым ғына бер рәссамдың һүрәттәрен, төшөрөү алымын үҙемә өлгө итеп ҡуймайым. Кемдең төшөрөү алымы ҡыҙыҡ тойола, шуны үҙләштереп ҡарарға тырышам. Әлеге көндә Ван Гогтың һүрәтләү техникаһын өйрәнеү өҫтөндәмен. Башҡортостан мәҙәниәтен сағылдырыусы картинамда аттар һүрәтен төшөрөп тороусы рәссамды Ван Гог стилендә эшләп, конкурсҡа ебәрҙем, һөҙөмтәһен көтәм.

**Иҙел:** Башҡорт тотоп ҡарамайынса ышанмай, тиҙәр. Минең дә, ысын башҡорт булараҡ, һәр нәмәне ҡулыма алып, тотоп ҡарамайынса, күңелем булмай. Һын яһағанда иң мөһиме - күңел тыныслығы. Ә балсыҡ менән эш иткәндә һаҡ, ипле булырға кәрәк. Сөнки ул һинең ҡулыңдың һәр хәрәкәтен йәнле нәмә кеүек тоя. Шуға күрә, образды һынландырыу эшенә тотонор алдынан күңелемде тынысландырып, әсәйемә шылтыратып, хәлдәрен белешеп алам. Ҡәҙерлемдең тауышын ишетеү менән күңел тыныслығы ла, дәрт тә, илһам да килә.

**▸ Рәссамдың милләте юҡ, тиерҙәр, бәлки. Ә шулай ҙа һәр рәссам үҙенә яҡын булған нәмәләрҙе һынландыра. Башҡорт рәссамы нимәне һынландырырға тейеш?**

**Әлиә:** Ҡасим Дәүләткилдиев исемен йөрөткән гимназияла уҡығас, күҙ алдыма ысын башҡорт рәссамы уның образында килеп баҫа. Уның картиналарында сит илдәр, бүтән милләт кешеләре һынландырылмаған. Бөйөк рәссам һүрәттәрендә башҡорт халҡының мәҙәниәте, көнкүреше, милли үҙенсәлеге, рухи байлығы, үткәне-бөгөнгөһө тулыһынса сағылыш тапҡан. Был, моғайын, беҙҙең ижадтың да төп үҙенсәлеге булыр, тип уйлайым.

**Алмаз:** Дәүләткилдиев кеүек, беҙ ҙә үҙ эштәребеҙҙә Башҡортостанды сағылдырырға тырышабыҙ. Бигерәк тә төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашҡанда сит ил кешеһенә ҡарауға ҡыҙыҡ, үҙенсәлекле булһын өсөн Башҡортостанды, үҙебеҙҙең миллилекте сағылдырып, тау-урманлы матур тәбиғәтебеҙҙе, башҡорт аттарын, милли аш-һыуҙы төшөрөргә тырышабыҙ. Ғөмүмән, Башҡортостан рәссамдарының һүрәттәре башҡаларҙан яҡты, йылы төҫтәр ҡулланып төшөрөлгән булыуы менән айырыла, тиҙәр. Был ҙур ҡалалар, мегаполистар урынына тәбиғәт ҡосағына һыйынып ултырған ауылдар күп булыуынан килә, тигән фекер әйтәләр.

**▸ Таланттарығыҙҙы үҫтереүгә ошо гимназияға уҡырға килеүегеҙ ярҙам иткәндер, моғайын. Тәүге тапҡыр гимназия ишектәрен асҡас алған тәьҫораттарығыҙ, ҡыҙыҡлы иҫтәлектәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ әле.**

**Айгиз:** Мин етенсе класты Йылайыр ауылы гимназияһында уҡый башланым да, һынлы сәнғәт өлкәһендәге ҡаҙаныштарымды раҫлаусы бөтөн маҡ-



***Ҡасим Дәүләткилдиев исемен йөрөткән гимназияла уҡығас, күҙ алдыма ысын башҡорт рәссамы уның образында килеп баҫа. Уның картиналарында сит илдәр, бүтән милләт кешеләре һынландырылмаған. Бөйөк рәссам һүрәттәрендә башҡорт халҡының мәҙәниәте, көнкүреше, милли үҙенсәлеге, рухи байлығы, үткәне-бөгөнгөһө тулыһынса сағылыш тапҡан. Был, моғайын, беҙҙең ижадтың да төп үҙенсәлеге булыр, тип уйлайым. Дәүләткилдиев кеүек, беҙ ҙә үҙ эштәребеҙҙә Башҡортостанды сағылдырырға тырышабыҙ. Бигерәк тә төрлө халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашҡанда сит ил кешеһенә ҡарауға ҡыҙыҡ, үҙенсәлекле булһын өсөн Башҡортостанды, үҙебеҙҙең миллилекте сағылдырып, тау-урманлы матур тәбиғәтебеҙҙе, башҡорт аттарын, милли аш-һыуҙы төшөрөргә тырышабыҙ.***

тау ҡағыҙҙары, һүрәттәрем һалынған тупланманы ебәреп, имтихандар биреп тормайынса бында уҡырға ҡабул ителдем. Уҡыу йорто тупһаһын ашатлау менән уның һынлы сәнғәт гимназияһы икәнлеге күҙгә ташланды - стеналарға һүрәттәр эленеп бөткән, һәр класс бүлмәһендә уҡыусылар өсөн ижади мөхит тыуҙырылған. Йәшермәйем, өйрәнеп киткәнсе ауыр булды. Көнөнә туғыҙ дәрес, аҙағынан төрлө түңәрәктәргә йөрөүе еңелдән түгел ине, шулай ҙа күнектем. Тәүге тәьҫорат алдаҡсы була, тиһәләр ҙә, тиҫтерҙәремдең иҫ киткес, һоҡланып бөткөһөҙ ҡул эштәрен күргәс, оҫталарҙы ошонда тәрбиәләйҙәр икән, тигән тәүге уйым дөрөҫкә сыҡты. Хәҙер мине лә уҡытыусыларым оҫтартып, камиллыҡҡа кимәлемде үҫтереп алып килә.

**Әлиә:** Интернатта йәшәгән балаларға сәғәт киске туғыҙҙан һуң йоҡларға кәрәк. Шундай тәртип булһа ла, бер кис ундан ашыу ҡыҙ беҙҙең бүлмәгә йыйылдыҡ та, компьютерҙа кино ҡарарға ултырҙыҡ. Ҡапыл коридор буйлап бүлмәләрҙе тикшереп йөрөгән тәрбиәсенең тауышын ишетеп ҡалдыҡ. Ишек төбөнә өйөлгән аяҡ кейемдәрен дә, кино ҡуйылған компьютерҙы ла һүндерергә онотоп, йәшенеп бөттөк. Кемдер кейем шкафына, кемдер карауат аҫтына инде, бер карауатҡа икешәрләп менеп яттыҡ. Тәрбиәсе ишекте асып ҡараны ла, бер нәмә лә өндәшмәйенсә, сығып китте. Интернат иҙәнен йыуыуҙан шулай еңел ҡотолдоҡ.

**Иҙел:** Ҡыҙҙар яғына сыҡҡан өсөн малайҙарға һәр ваҡыт эләгә. Тәрбиәселәр тотһа, интернаттың ҡыҙҙар йәшәгән корпусында иҙән йыуып ҡайтабыҙ.

**▸ Гимназияны тамамлағас, буласаҡ һөнәрегеҙҙе һынлы сәнғәт менән бәйләйәсәкһегеҙме? Әллә рәсем төшөрөү шөғөл генә булып ҡаласаҡмы?**

**Айгиз:** Мин инженер йәки дизайнер һөнәрен үҙләштерергә уйлайым. Бөгөнгө көндә рәссамға эш табыуы ауыр түгел, төрлө байрамдар үткәргәндә биҙәү эштәре башҡарып, аҡса табырға мөмкин, тип уйлайым.

**Алмаз:** Биҙәү эштәре бер вариант булһа, икенсеһе - портрет төшөрөү. Оҫталығың булған осраҡта, был рәүешле лә аҡса эшләргә мөмкин. Ә мин артабан юғары уҡыу йортоноң архитектура факультетында уҡыуымды дауам итергә хыялланам.

**Әлиә:** Мин һүрәт төшөрөргә лә яратам, балаларҙы ла яратам. Балаларҙы рәсем төшөрөргә өйрәтермен, тип уйлағайным, ата-әсәйем килем килтерерлек һөнәр һайларға өгөтләй. Аҡсаға килгәндә, мин быйыл йәйгеһен балалар баҡсаһын биҙәп, һүрәттәр төшөрөп, арыу ғына аҡса эшләп алдым. Үҙемә оҡшаған эш башҡарып, аҡса ла эшләй алыуым ҡыуандырҙы.

**Иҙел:** Туғыҙынсы синыфтан һуң Өфө сәнғәт училищеһының скульпторҙар әҙерләү бүлегенә һынау тотоп ҡарарға уйлайым. Унда урта махсус белемле белгес булып сығырға мөмкин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормош - бәйге, тип яҙа халыҡ шағиры. Кеше һәр ваҡыт ярышып, йәшәп өлгөрә алмай "сабып", ашығып донъя көтә. Әгәр ҙә "Тукта, мәл!" тип ҡысҡырырға кәрәк булһа, күптәр ергә ҡарап йөрөп, иң һоҡландырғыс минуттары үтеп барыуын һиҙмәй ҙә ҡалыр ине әле. Донъяның йәмен, матурлығын күрә белергә, туктатырлыҡ мәлдәрҙе үҙ ижадында сағылдырырға өйрәнеүсе Ҡ.Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернат уҡыусылары менән һөйләшеүҙән шул асыҡланды: ярыш менән ижад йәнәш йәшәй, тик улар араһындағы сиктәрҙе дөрөҫ ҡуя белеү кәрәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

# ЯҠШЫНЫҢ ДА...

## ямандың да башы - ғаиләлә

**"Алкоголь эсеү ғәҙәте кешелеккә һуғыш, аслыҡ һәм тағунды (чума) бергә алғанға ҡарағанда ла күберәк зыян килтерә", тигән Чарльз Дарвин. Был һүҙҙәрҙе күптәрҙең ишеткәне бар, ләкин аңлаусылар ғына һирәк. Шулай ҙа үҙҙәре лә аңлаған һәм башҡаларға ла ошо дөрөҫлөктө еткерергә тырышыусылар ҙа юҡ түгел. Нәҡ ошондайҙар рәтенә бөгөнгө геройҙарыбыҙ - йәш ғаилә Гөлбикә һәм Сәлим УСМАНОВТАРҙы ла индерергә мөмкин. Был мәсьәләгә булған ҡараштарын белеү өсөн уларға бер-нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Айыҡлыҡ менән эскелекте нисек характерлар инегеҙ?**

**Сәлим:** Айыҡлыҡ - "эскелек" тип исемләнгән ҙур диңгеҙ уртаһында урынлашҡан һәм бар кешелеккә оло афәттән ҡотолоу мөмкинлеге биргән утрау. Ул диңгеҙҙең упҡынында өйөрөлөүселәрҙең барыһы ла был утрау хаҡында яҡшы белә, тик уға булған ҡараштары ғына төрлөсә. Берәүҙәр унда эләгеү теләге менән яна, ләкин ҡолас ташлап йөҙөп китергә һәм барлыҡ ҡойондарҙы йырып сығып барып етергә үҙендә көс тапмай. Икенселәр иһә ҡотолоу хаҡында уйламай ҙа, сөнки "айыҡлыҡ" утрауында яуаплылыҡ, иман, ғәҙеллек һәм башҡа ошондай юғары сифаттарға эйә булыу, хеҙмәт яратыу, үҙеңде генә түгел, башҡаларҙы ла хөрмәт итә белеү мөһим, ә алкоголь ҡолдарына был төшөнсәләр ят.

**Гөлбикә:** Эскелек - айырым кешенең генә түгел, уның ғаиләһенең, дуҫтарының, ғөмүмән, тотош йәмғиәттең бәләһе. Ул кешене социаль йәһәттән түбән тәгәрәүгә, әхлаҡһыҙлыҡҡа алып килә. Бындай күренештәр һәр заманда ла бар һәм буласаҡ, ләкин бөгөнгө көндә улар айырыуса киҫкенләшкән кеүек. Һәм бының сәбәбен мин нәҡ эскелектең сәскә атыуында күрәм.

**➔ Һуңғы ваҡытта алкоголизм күренеше "йәшәрә" бара. Йәштәр һәм хатта балалар иҫерткес эсемлектәр тотҡонона эләгә. Быға нисек юл ҡуймаҫҡа?**

**Сәлим:** Тормош булғас, тыуған көндәр үткәрәбеҙ, башҡа төрлө байрамдарҙы билдәләйбеҙ. Ошондай табындар артында беҙ, атай-әсәйҙәр, үҙебеҙҙе лайыҡлы тоторға бурыслыбыҙ. Был матур һүҙ һөйләүгә, тәртипле булыуға ғына түгел, ә, тәү сиратта, иҫерткес эсемлектәрҙе бөтөнләй инҡар итеүгә ҡайтып ҡала. Бөгөн күп ғаиләләрҙә ошондай күренеште осратырға мөмкин: байрам өҫтәлендә балалар ата-әсәһе менән үҙҙәренә ҡойолған һутты сәкәштереп эсеп ебәрә, бер аҙҙан иҫерек кеше булып ҡылана башлай. Ололарҙың көлөүе, хуплап ебәреүе уларға үҙҙәрен шәп кеше итеп тойорға мөмкинлек бирә һәм бала аңында "ошолай эшләһәм, барыһы ла мине ратасаҡ, миңә генә ҡарап торасаҡ", тигән фекер ярала. Үҫкән һайын һуттар "ҡатылана", тәртип боҙола, ҡылыныштар йәмһеҙләнә бара, ләкин кеше бының бер насарлығын да күрмәй, сөнки бала саҡтан ошондай хәл-торош уға яҡын һәм өйрәнелгән.

**Гөлбикә:** Хәҙер күп балалар атай йортонан иртә сығып китеп, төрлө лицей, интернат, гимназияларҙа белем ала. Был, бер яҡтан, яҡшы, сөнки ситтә үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға, башҡа кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорорға өйрәнәһең. Ләкин был миҙалдың икенсе яғы ла бар. Контроль кәмеүен аңлап алған ҡайһы бер балалар бәйҙән ысҡынған һымаҡ булып китә. Шуныһы ҡурҡыныс. Шуға күрә, "балабыҙ уҡып йөрөй, уҡытыусы, тәрбиәсе ҡарауы аҫтында" тип тыныс йөрөргә ярамай. Баландың уҡыған ҡалаһы яҡынмы-алыҫмы, айына бер тапҡыр булһа ла барып күреү, аҙна һайын тәрбиәсеһенә шылтыратып, хәлдәрен һорау, уҡыуы, тәрбиәһе менән ҡыҙыҡһыныу мөмкинлеген табырға кәрәк. 8-11 класс уҡыусыларын айырыуса ҡаты контролдә тоторға кәрәк, сөнки ошо ваҡытта, халыҡ әйтмешләй, "танауға еҫ керә" башлай: уҡыу икенсе планға күсә, йөрәкте беренсе мөхәббәт ялҡындары ялмап ала. Шулай уҡ был осорҙа улар өсөн атай-әсәйгә ҡарағанда йәштәштәренең фекере, һүҙе, тормошҡа ҡарашы мөһимерәк була башлай, төрлө насар компанияларҙа "үҙ кеше" булып күренеү өсөн тәмәке тартырға, эсеүгә әүәҫләнәләр. Шуға ла баланың һәр һүҙен, быға тиклем күҙәтелмәгән яңы ҡылығын ваҡытында ишетергә һәм күрергә кәрәк, сөнки аҙаҡтан һуң булырға мөмкин.

**Сәлим:** Һүҙҙе дауам итеп шуны әйткем килә. Йәмғиәт ҡанундары ҡаты һәм әхлаҡи яҡтан ныҡ булмаған кешене тиҙ һындыра. Кем көслө - шул матур тормош ҡороуға өлгәшә, ә көсһөҙҙәр бөгөлөп төшә. Шуға күрә, баланы бөтәһенә лә әҙер булырға өйрәтергә кәрәк. Ә оло тормошҡа баланы кем әҙерләргә тейеш? Бөгөн, ҡыҙғанысҡа күрә, ҡайһы бер атай-әсәйҙәр бала тәрбиәләүҙе мәктәпкә, уҡытыусыға, ғөмүмән, йәмғиәт иңенә ауҙара. Ләкин был юл атай-әсәйҙән балаһы өсөн яуаплылыҡты алып ташламай. Әгәр ҙә балағыҙ үҫә төшкәс иҫерткес эсемлектәр ҡуллана йәки тәмәке тарта икән - ғәйепте үҙегеҙҙән эҙләргә кәрәк. Тимәк, ваҡытында борсоулы иҫкәртеүҙәргә иғтибар итмәгәнһегеҙ йәки күрергә теләмәгәнһегеҙ.

**➔ Эскелек проблемаһын ниндәй ысул-ғәмәлдәр менән хәл итергә мөмкин?**

**Гөлбикә:** Күптәр, алкоголь тартыныусанлыҡты һәм эске көсөргәнешлекте алып ташлай, тип уйлай. Ләкин был хата фекер, алкоголь проблемаларҙы хәл итмәй, ә ҡыҫҡа ваҡытҡа оноттороп, уларҙы тағы ла төпкәрәк этәрә, ҡатмарландыра. Кеше үҙенең кәмселектәрен һәм проблемаларын иҫерткес эсемлектәрһеҙ, ихтыяр көсө менән еңеп сығырға өйрәнергә тейеш. Шулай уҡ матбуғат сараларында, телевидение, радиола, кинола ла алкоголь хаҡында тулы һәм ысынбарлыҡты сағылдырған мәғлүмәттең күп булыуы ыңғай һөҙөмтәгә килтерәсәк. Тағы ла автосинхронизация режимын тоҡандырыу ҙа күпте бирер ине, моғайын. Уға ярашлы, төркөмдәге, йәғни йәмғиәттәге 10-30 процент кеше бер үк нәмәне эшләһә, ҡалғандар ҙа ошоно уҡ ҡабатлай башлай. Әгәр ҙә эргә-тирәһендәгеләр айыҡ тормош алып барһа, спиртлы эсемлек ҡулланырға яратыусыға бергә эсеү өсөн "дуҫ" булмаһа, тора-бара ул был ғәҙәтен ташлаясаҡ, тип уйлайым. Тағы ла шәхси өлгө хаҡында ла онtorорға ярамай. Бала, тәү сиратта, ғаиләһендә ыңғай өлгө алырға тейеш. Әгәр ҙә бала ата-әсәһенең байрамда, тыуған көндәрҙә һәм башҡа тантаналарҙа спиртлы эсемлек эсеүен күрә икән, уның күңеленә "былай эшләргә ярай", тигән уй кереп оялай һәм ҙурайғас, бер ниндәй тартыныуһыҙ ошоно уҡ ҡабатлаясаҡ. Балаларҙа күҙәтелгән яҡшының да, ямандың да башы - ғаиләлә. Ошоно онотторға ярамай.

**Сәлим:** Ҡатын-ҡыҙ тормош иптәшен айырылыу, балаһын күрһәтмәү менән ҡурҡытып, "айығайтырға" тырыша, ләкин был юл менән бик һирәктәр генә теләгенә өлгәшә. Ә иҫерткес эсемлек ҡулланыу һөҙөмтәһендә водитель танытмаһын алдырып, ҙур күләмдә штраф түләп тә барыбер руль артына ултырған дыуамалдар аҙмы арабыҙҙа? Быларҙан сығып, мин төрлө тыйыу, ҡурҡытыу, янауҙар менән генә был проблеманы хәл итеп булмай, тип әйткем килә. Минеңсә, эскелекте тамырынан ҡоротоу өсөн, тәү сиратта, халыҡтың социаль-көнкүреш тормошон яйға һалыу, эш менән тәьмин итеү кәрәк. Тау емерер әзмәүерҙәй ир-егеттәребеҙ өйҙә эшһеҙ ята. Эше булмағас - аҡсаһы ла юҡ. Кеҫәһендә елдәр уйнағас - ғаилә ҡороу мөмкинлеге лә юҡ. Ә ир-егеткә ғаиләнең булмауы ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда күпкә ауырыраҡ тәьҫир итә. Тәүҙә йәшлек еле менән йөрөгән егеттәр йылдар үткән һайын баҫыла, үҙ-үҙенә бикләнә, күңеле ҡатылана, эсе боша һәм яйлап ҡына араҡы упҡынына бата. Кәләшен иркәләү, балаһын тәрбиәләү урынына улар шешә ҡосаҡлап йәшәй. Араҡы менән дуҫлашҡан ир-егет, ғаилә ҡорған хәлдә лә, матур тормош менән йәшәй алмай, сөнки уның мейеһе спирт менән "шыйыҡланған", йәшәү рәүеше боҙолған. Ошо рәүешле барлыҡҡа килгән бикле түңәрәкте йырып сығыу өсөн бик һирәктәрҙең генә көсө етә.

**Гөлбикә:** Ҡайһы берәүҙәр был мәсьәләгә көләмһерәп кенә ҡарай, уның ысынлап та халыҡ һәм дәүләт өсөн оло афәткә әйләнеүенә ышанмай. Ләкин көндән-көн эскелеккә батҡан улына йәки ҡыҙына үлем теләүсе әсәйҙәрҙең, ошондай хәлгә төшкән үҙ атаһын йәки әсәһен күрә алмаҫлыҡ хәлгә еткән балаларҙың күбәйә барыуы проблеманың ни тиклем тәрән һәм ҡот осҡос икәнлеге хаҡында һөйләй. Бөгөнгө көндөң ҡурҡыныс ысынбарлығына күҙ йомоп ҡарау кире ҡайтара алмаҫлыҡ әҙемтәләргә килтерәсәк, шуға күрә барыбыҙға ла берҙәм булып, эскелекте бөтөрөү өсөн тырышырға кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Барыһына ла һайлау мөмкинлеге бер тигеҙ бирелгән. Эскерһеҙ, тимәк, матур һәм тулы тормошта йәшәргәме йәки алкоголь ҡулланып, китек һәм имәнес булып тереклек итергәме - һәр кемдең үҙ ихтыярында. Ә Сәлим менән Гөлбикә кеүек йәштәрҙең аңлылығы, эскелекте бөтөнләй инҡар итеүҙәре һәм башҡаларҙы ла ошоға әйҙәүҙәре - яңылышыусыларҙың әҙерәк булыуына өмөтләнергә урын ҡалдыра.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ӘЙТӘГҮР!

# АУЫЛДА ЛА, ЮЛДА ЛА ТЫҢЛАЙҘАР...

**Һорау: Башҡортостан "Юлдаш" радиоһы тураһында бер кәлимә фекерегеҙ ниндәй булыр?**

**Фәнил КҮЗБӘКОВ, БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты профессоры:** Йәмғиәттең кимәле бөгөн тормоштоң барса яғынан да хәбәрҙар, мәғлүмәтле булыуға ҡайтып ҡала, тиерлек. Шуға ла билгестәрҙең алдынғы йәмғиәтте - мәғлүмәти йәмғиәт тип билдәләүе бик тәбиғи. Был йәһәттән, әлбиттә, һәр бер мөһим яңылыҡты ашығыс, һуңлатмай-һыуытмай, үҙ мәлендә халыҡҡа еткерә алыуҙа киң мәғлүмәт сараларының роле баһалап бөткөһөҙ. Киң мәғлүмәт саралары тигәндә, беҙ телевидение, интернет, ҡағыҙ баҫмалар, радионы күҙ уңында тотабыҙ. Уларҙың һәр береһенең үҙенсәлектәре, өҫтөнлөктәре, алыштырғыһыҙ урыны бар. Радионы, мәҫәлән, юлда ла, эштә лә, тәбиғәт ҡосағында ла тыңларға мөмкин. Радиоалғыс ҡына булһын.

Билдәле булыуынса, эфирға Башҡортостан радиоһы тәү башлап 1927 йылдың көҙөндә сыға, ә даими тапшырыуҙар 1928 йылдың августынан ойошторола. Хәбәрҙе тиҙ арала еткерә алыу йәһәтенән киң мәғлүмәт сараларының береһе лә радио менән ярыша алмай. Был өҫтөнлөктө етәкселектең дә, радиожурналистарҙың да дөрөҫ файҙалана белеүе кәрәк. Унан килеп, радио тауыш, интонация менән эш иткәнлектән, телдең һығылмалылығын, һүҙ моңо нескәлектәрен тойоу бик мөһим. Был йәһәттән тыуған телгә һөйөү, шундай рухи байлыҡ менән ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙә радионың әһәмиәте ҙур. Күренеүенсә, радиожурналист уғата яуаплы эш атҡара. Беҙҙә был һөнәрҙе яратып башҡарған хәбәрселәр байтаҡ. Уларға мин ҡатмарлы бурыстарын еренә еткереп үтәүҙә тик уңыштар ғына теләйем. Тура эфирҙа әңгәмә ойошторғанда әҙәби телдә дөрөҫ һөйләшеү, уның бөтә боролош-бөгөлөштәрен башҡара алыу маҡсатында журналистар үҙ өҫтөндә бер туҡтауһыҙ, даими эшләргә тейеш. Тыңлаусылар уларҙы ҡабатлай, уларҙан өлгө ала икәнен иҫтәренән сығармаһындар.

**Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА, студент:** Баш ҡалала радионы ҡала буйлап маршрут автобусында юлланған осраҡта ғына ишетергә мөмкин. Әммә әлегә тиклем бер тапҡыр ҙа ҡала буйлап башҡорт йыры яңғыратып, "Юлдаш" радиоһын тыңлап йөрөгән автобус шоферын күргәнем булманы. Ә бит сит милләт кешеһе автобуста йөрөһә лә тартынмайынса үҙенең туған телендәге йырҙарҙы яңғырата, теләйме-теләмәйме, уны барыһы ла тыңлап килергә мәжбүр була. Был күренеш маршрут автобустарына ғына түгел, сауҙа нөктәләренә лә ҡағыла. Мәҫәлән, Үҙәк баҙарҙа күпме йөрөп, бер тапҡыр ҙа дәртле ҡурай моңон, йәки үҙебеҙҙең йырсылар ижад иткән көйҙәрҙе ишеткәнем булманы. Шул уҡ ваҡытта, ҡытайҙар һатыу иткән баҙарға барып инһәң - ҡытай радиоһы, әзербайжандар һатынған ерҙә - әзербайжан көйөн ишетергә мөмкин. Башҡорттар ҡала маршруттары буйлап йөрөгән автобустарҙа, һатыу нөктәләрендә эшләмәй, тигәнде аңлатмай бит. Был башҡорттарҙың хатта үҙ телендә йыр тыңларға тартыныуынан, кеше алдында оятҡа ҡалмайым, тип ҡурҡыуынан килә, тип иҫәпләйем. Шул рәүешле хатта үҙебеҙҙең башҡортса радионы тыңларға ла ҡурҡып, милли үҙаңыбыҙҙан ситләшеп, моңһоҙланып, баҫылып йәшәйбеҙ. "Юлдаш" радиоһының контенты күпселеге менән ауыл халҡынан тороуы бер ҙә ғәжәп түгел инде был осраҡта. Мин дә радионы ауылға ҡайтһам ғына тыңлайым, беҙҙең өйҙә "Юлдаш" каналы көнө-төнө һөйләп тора. Хатта йәйгеһен махсус батарейкалар ҡуйып, радиоалғысты бесәнгә алып барабыҙ.

**Гөлгөнә МЫРҘАҠАЕВА, Баймаҡ районы:** Ауыл кешеһенең эше тауыҡ сүпләһә лә кәмемәҫлек, күп бит ул. Шуға күрә, телевизор ҡарап йәки компьютер артында ултырып булмай. Ә бына "Юлдаш" радиоһын иртәнсәк йоҡонан торғас ҡуяһың да, ул кис ятып киткәнсе һөйләп тора. Эш араһында моңло йырҙар, республика яңылыҡтарын, төрлө ҡыҙыҡлы тапшырыуҙар тыңлап йөрөйһөң. Радио күңелде йыуата, кәйефте күтәрә, дәртләндереп ебәрә хатта. Ауылда ҡалалағы кеүек театр, концерт залдары юҡ, "Юлдаш" радиоһы аша алып барыусылар йәки театр актерҙары тарафынан уҡылған төрлө әҫәрҙәрҙе, башҡортса лирик йырҙарҙы тыңлап алһаң, күңелгә шул тиклем рәхәт булып китә. Әйтергә кәрәк, каналда элеке йырҙар ҙа, яңыраҡ сыҡҡандары ла уйнатылыуы төрлө аудиторияны йәлеп итә. Рус телендәге үҙәк тапшырыуҙарҙан һис бер яғы ла ҡайтыш булмаған үҙебеҙҙең "Юлдаш" каналы булыуы ҡыуандыра. Башҡорт телен, көйөн, мәҙәниәтен пропагандалауҙа уның роле баһалап бөткөһөҙ, минеңсә.

**Сәриә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## "Пойдет Мәликәгә..."

Шәүкәт ағайҙың ҡатыны Белорет баҙарынан йәйәүләп, кискә генә ҡайтып етә. Ағай быны битәрләй, быймаһы менән бәргеләй икән. Ҡарт атаһы менән генә йәшәгән күршеһе Мәликә апай араларға маташһа, үҙенә лә быйма башы эләгә. "Пойдет Мәликәгә, өйҙә туҡмар ире юҡ, бик пойдет", - ти икән быны күреп торған атаһы. Әле лә шуға оҡшашыраҡ хәл булһа, "Пойдет Мәликәгә, туҡмалырға ире юҡ", тип мәрәкәләйҙәр. Сысҡанға - үлем, бесәйгә көлкө кеүек инде.

## "Мешһинуны"

Студент саҡ. Ни бар, шуны бөхтәләп кенә кейәбеҙ. Ә Мәүә үтә көйәҙ, ҡышын да йоҡа ойоҡ менән туфли кейеп йөрөргә яратты. Шуның касафатылыр инде, бөтөн тәнен ваҡ һыҙлауыҡ баҫты. Ауылға, Ғәйшәнең әсәһе Йыһан апайға киттек дауаланырға. Апай мунса яҡтырҙы ла, Ғәйшәгә: "Мәүәне эҫе итеп миндекләп мешһинуны (беш һин уны) ", - тип бойорҙо. Ул шулай ҡыҙыҡ һөйләшә ине. Ғәйшә "мешә генә бит" Мәүәне, уныһы илай, хәле бөттө. Саҡ өйгә алып индек. Йыһан апайҙың иҫе лә китмәне, толопҡа урап һалды. Толопта ятҡан Мәүәгә үлән сәйе, иҙеп ҡорот эсерҙе. Өс көн "мешкәс", һыҙлауыҡтары бөттө. Көйәҙ туңмай, ҡалтырай, тип көлөшкән булабыҙ. Әле лә мунса һайын ошо хәлде һағынып иҫләп алам.

## Өйгәме, һарайғамы?

Ғәлим ағай бик шаян кеше ине, ике ҡустыһы ла унан ҡалышманы. Уның белмәгән, үҙләштермәгән һөнәре ҡалмағандыр. Тик ҡатыны ғына урынһыҙға көнләшеп йонсотто. Ағай кискәрәк ҡалһа, еңгә ике ҡәйнешен - Һаҙый менән Фәйзерахманды ағайҙарын эҙләтергә сығара. Бер тапҡыр былар сана һөйрәп сығалар. Өс шаян эште бергә хәл итә. Ағай санала ултыра, иҫерек, имеш. Тегеләр һөйрәп килтерәләр ҙә: "Еңгә, кәзә тәкәһен алып килдек, өйгәме, һарайғамы?" - тип һөрәнләйҙәр. Еңгә сығыуға ғына ағай ҡустыларын туҡмай башлаған була, йәнәһе, ул кәзә тәкәһе түгел. Еңгә ирен яҡлап сарбанлай. Аҙаҡ та ауылда мал йәки берәй әйбер алып килһәләр, "Өйгәме, һарайғамы?" тип көлөшәләр ине. Шулай, көнсөл барҙа көл оса, һүҙ ҙә урам буйында йөрөй.

## Ҡунаҡ

Биби апай ире һуғышҡа киткәндә 6 бала менән тороп ҡала. Ашау наҡыҫ, үҙе көнө буйы эштә, өлкәнерәк ҡыҙҙары бәләкәйҙәрҙе ҡарай, донъя көтә. Бер байрамда апай булған ризыҡтары менән күрше-күләнен саҡыра, балаларға ла өлөш тейә. Иң бәләкәй улына ҡунаҡ бик оҡшап ҡала. Ҡунаҡ булһа, гел ашарға була, тип уйлап, бер көндө малай яҡын-тирәләге күршеләрен сәйгә саҡыра. Килһәләр, хужабикә эштә, шыш та, быш та юҡ, ти. Эштең нимәлә икәнен аңлаған ҡатындар өйҙәренән өҙөп-йолҡоп тиерлек ризыҡ алып килә, апай ҡайтыуға самауыр ҙа ҡайнай. Биби апай аптырап, илап ебәрә хатта. Шулай күмәкләп сәй эсәләр. Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, ике ҡулды ла бешерә шул.

## Кофе бирергә

Яланбикә еңгә "культурно" йәшәргә тырыша: ҡайҙа, кемдә ни күрә, шуны ҡабатлай. Шуның өсөн көлкөгә лә ҡалғылай. Бына бер ваҡыт күрше ауылға барғанда хужабикәнең: "Кофе бирергә онотмаҫҡа", - тигәнен отоп ҡайтҡан был. Йәһәтләп ҡунаҡ йыйған, ә үҙе ҡағыҙға ҙур итеп "кофе бирергә" тип яҙып, аш бүлмәһенең стенаһына элгән. Ҡунаҡтар килгән, тәмле аш көтөп ултыралар. Ә еңгәбеҙ яҙыуға ҡарай ҙа кофе сығара, ҡарай ҙа кофе сығара икән быларға. Йәнәһе, "культурно" һыйлай. Ҡунаҡтар аптырап та, көйөп тә, кофе эсеп, маз булып ҡайтып китә. Һәр күргәнде ҡабатлау тутыйғошҡа ғына килешә шул.

## Дедушка победил

Ҡаланан өләсәләренә 6 йәшлек Сәлим килгән. Уға бөтә нәмә ҡыҙыҡ: ҡош-ҡорт, мал-тыуар, әтәс ҡысҡырыуҙары. Кәртә эсендә бөтә нәмәне иғтибар менән күҙәтеп йөрөгән малай, олатаһы бер әтәсте салырға итеп баҫтыра башлағас, тағы ла ҡыҙыҡһыныбыраҡ китеп уның артынан ҡалмай йүгергеләгән. Ниһайәт, әтәс тотола, бала күҙе алдында салына. Сәлим өйгә йүгерә: "Өләсәй, дедушка победил, әтәс башы улетел!"- тип ҡыуаныслы итеп ҡысҡырып килеп инә. Бала кешегә ололар башҡарған һәр эш оло еңеү, шатлыҡлы ваҡиға кеүек күренә. Әммә бала алдында мал салыу борон-борондан бушҡа ғына тыйылмайҙыр, сөнки ул бала күңелендә ҡатылыҡ тәрбиәләй.

## Өләсәйский һөйләшәм

Өфөнән йәйге ялға 4 йәшлек Вәкил ҡайтҡан. Ҡалала йәшәгәс, баланың теле русса асылған. Шулай ҙа малай өләсәһенә эйәреп, башҡортса һупаларға маташа икән. Вәкилдең ауыҙынан "хыусәм", "хлебшай" тигәнгә оҡшаш һүҙҙәр ишетелеп ҡалғылай. Быны ишетеп ҡалыусы ололар йылмайып ҡараһа, малай: "Өләсәйский һөйләшәм!"- тип маһайып уҡ ебәрә. Урамға сығырға йыйынғанда һыймаған кейемен кейҙерергә булһалар: "Не һыям",- тип мыжый. Өләсәһенең: "Һыймай тип һөйләш", - тиеүенә, Вәкил: "Унда май юҡ бит,"- тип илап та алғылай. Йәй буйына ауылда ял итеп, Вәкил илай-илай башҡортса арыу ғына һөйләшергә өйрәнеп китте китеүгә. Әммә ғаиләлә ата-әсә балаһы менән башҡортса һөйләшмәһә, Вәкилгә икенсе йыл тағы киренән "өләсәйский һөйләшергә" өйрәнергә тура килер инде.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы**
**Байым ауылы.**

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН БЕЛЕҮ...

## өҫтөнлөк ул

**Ошо көндәрҙә Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында "Тамыр" балалар телеканалының "Таш иретер йырыбыҙ!" исемле байрамы үтте. Концертты тамаша ҡылырға килеүсе бәләкәстәр һәм уларҙың ата-әсәләре йөрәктәрҙе иретерлек йыр-моңға сорналып, күңелдәрен үҫтереп ҡайтты.**

Тамашаның тәүге минуттарынан уҡ кескәйҙәр Шүлгәнташ мәмерйәһенең боронғо һүрәттәр төшөрөлгән залына барып инде. Аҡыллы Фәнүник, отҡор Асия, Иҙел, Азамат, Айгөл менән бергә мәмерйә йәшергән серҙәрҙе асырға юлланған тамашасылар, "Тамыр" йыр ансамбле йырсылары, "Сулпылар" республика телевизион конкурсы еңеүселәре, Сибай ҡалаһынан "Осҡон", Өфөнән "Умырзая" бейеү ансамблдәре бейеүселәре, "Олимп" эстрада-спорт студияһы балалары сығыштарына, зауыҡ менән сағыу итеп биҙәлгән сәхнәгә иҫтәре китеп ҡарап ултырҙы. Ике йәшлек кенә

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ИР-ЕГЕТТЕҢ ЙӨРӘГЕНДӘ...

## эйәрле-йүгәнле ат ятыр



**"Бер һүрәткә ҡарап..." рубрикаһында тәкдим ителгән Хәтип Фазыловтың "Төш" тигән һүрәтенә ҡарата мин дә үҙ уйҙарымды яҙырға бытырсылыҡ итәм.**

Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы Хәтип Фазылов бәрәкәтле Әбйәлил еренән. Әбйәлил районы башҡорт халҡына бөйөк рәссам Әхмәт Лотфуллинды ла бирҙе. Талантлы рәссам Хәтип Фазылов уның традицияларын дауам итеп, тыуған яғын, уның кешеләрен данлай. Зыялы яҡташтарының фекеренсә, Хәтип Фазылов иң кешелекле, әҙәпле, баҫалҡы, итәғәтле кешеләрҙең береһе, ә һүрәттәре уның эске матурлығының сағылышы, тип билдәләргә кәрәк.

Хәтип Сәрүәр улының "Төш" тигән картинаһы миңә испан рәссамы Сальвадор Дали ижад иткән "Төш" һүрәттәрен иҫкә төшөрҙө (1930, 1931, 1937 йй.). Дали кеүек, башҡорт рәссамы ла был һүрәтен сюрреализм йүнәлешендә яҙған. Сюрреалистарҙың фекеренсә, ижади энергияны аҫҡы аң билдәләй, ул кеше йоҡлағанда, гипноз ваҡытында, һаташҡан ваҡыттарҙа, төштәрҙә барлыҡҡа килә. Хәҙерге сюрреализмдың нигеҙендә сюжеттың фэнтезиға ҡоролоуы ята. Шул рәүешле рәссам әҫәргә ҡарата тамашасыла ҡыҙыҡһыныу уята, уның кәйефен күтәрә.

"Төш" картинаһы тап фантасмагорияға ҡоролған. Был һүрәттә реаль булмаған иҫ киткес матур күренеш һүрәтләнгән: ир бала иҙерәп йоҡлап ята, ә артҡы планда, йәғни төшөндә, ул егет булып үҫеп етеп, етеҙ атта саба. Йәшел, алтынһыу төҫтәрҙең алмашыныуы, ваҡиғаларҙың ябай булмаған ағышы, иҫ киткес матур үҙгәрештәр хәҙерге сюрреализмдың төп һыҙаттарын тәшкил итәләр.

Рәссам Фазылов төрлө юҫыҡтағы, ҡапма-ҡаршы нөктәләрҙәге хәл-ваҡиғаларҙы, йәғни ваҡыт һәм киңлекте оҡшатыу, сағыштырыуҙар менән тамашасыға асып бирергә тырышҡан. Мәҫәлән, иркен тын алып йоҡлап ятыусы бала күндәмлекте, статиканы белдерһә, ә ярһып сапҡан ат өҫтөндәге йәш егет ҙур көс менән атлығыу, ашҡыныу хистойғоларының (динамиканың) төп билдәһе. Ваҡыт төшөнсәһен йәш айырымлыҡтары күрһәтеп тора.

Башҡорт халҡында шундай әйтем бар: "Ир-егеттең йөрәгендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр". Рәссамдың алдан һиҙемләүе буйынса, был бала үҫеп етер, башҡорт батыры булыр, тыуған ерен, илен, телен ҡурсалар. Һүрәттә ҡулланылған йәшел, алтын төҫтәр уның бәхетле киләсәгенә ишара яһай, тыныс, бай тормош вәғәҙә итә.

Шулай итеп, был һүрәт рәссамдың күңел торошон күрһәтә. Авторҙың билдәләүенсә, тәмле йоҡо - гармониялар батшалығы ул. Камиллыҡҡа юлдың башы - йоҡола.

Минең уйымса, был һүрәт заман һулышын да һынландыра. Сөнки беҙҙең киләсәгебеҙ - балаларҙа. Бала ни тиклем тыныс, матур төштәр күреп йоҡлаһа, уның алдағы тормошо ла шул тиклем матур, тыныс, бәхетле буласаҡ. Арғымаҡтарҙа тик һабантуйҙарҙа ғына елдерһен ул балаларыбыҙ. Яуҙар булмаһын, төрлө һуғыштарға аттарҙа сапмаһындар беҙҙең ғәзиздәребеҙ. Атай-әсәйле булып, тыныс йоҡлаһындар бәпестәр, әммә йөрәктәрендә эйәрле-йүгәнле ат йөрөтһөндәр.

**Әлфиә ЗӘБДИНОВА,**
**ветеран уҡытыусы.**
**Өфө ҡалаһы.**

---

сабыйҙар ҙа "Уралтау", "Башҡорт теле", "Аҡбуҙат" йырҙарын ауыҙҙарын асып, күҙҙәрен түңәрәкләндереп тыңланы. Кескәйҙәрҙең ятраҡан артистары сығыу менән шығырым тулы зал шыпшым булып ҡала, хатта илаусылар ҙа тымып, сәхнәгә төбәлә. Бишектән үк туған теленең моңон ишетеп, нескәлектәрен тойоп тәрбиәләнеүсе кескәйҙәр ата-әсәләренә лә иғтибар итмәйсә алып барыусыларҙың һәр һүҙен йотоп ултыра. Был өҫтөнлөктән мәхрүмдәре минут һайын ололарҙы төрткөсләп, алып барыусылар нимә һөйләүен аңлатыуҙы талап итә. Улар Шүлгәнташ мәмерйәһендә "Тамыр"ҙар нишләп йөрөүен аңламай ҙа ҡалды, төҫлө. Һинд фильмын тәржемәһеҙ ҡарап ултыралармы ни, йырбейеүе ҡыҙыҡ, нимә һөйләүҙәре мөһим дә түгел кеүек...



Балалар өсөн төрлө ярыштар, отҡорлоҡ бәйгеләре, уйындар ҙа үткәрелде. "Башҡортостанда ниндәй затлы таштар бар?"- тигән һорауға "Таш! Таш!"- тип тә ҡысҡырып, "Избизташ"- тип тә яуап биреп, "Тамыр" балалар телеканалының дискын ҡулдарына төшөрҙе сабыйҙар. Ҡайһы берәүҙәргә малахит, бриллианттарҙың башҡортса атамаһын белеп килеү бурысы йөкмәтелде. Әллә күпме тиҫтерҙәре араһында һанаулы ғына бүләктәрҙе алырға мөмкинлектәре булып та, башҡортса атамаһын әйтә алмаусылар баштарын эйеп кенә сәхнәнән залға үтеп ултырҙы. Ошондай матур байрамда шундай күңелһеҙ хәлдәрҙе күҙәтеүе бер аҙ кәйефте ҡыра биреп тә ҡуйҙы. Хөрмәтле ата-әсәләр, милләттәштәр туған телде белеү, һөйләшеү өҫтөнлөгөн ҡасан төшөнөр, балаларына ла аңлатыр икән?

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

---

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# ИСЕМ-ШӘРИФТӘРЕҢДЕ ДӨРӨҪ ЯҘАҺЫҢМЫ?

**Хәҙерге быуын йәштәре, Аллаға шөкөр, сабыйҙарына бик матур, күңелгә ятышлы исем ҡуша. Саф башҡортсаларынан тыш, дин аша ғәрәп, фарсы теленән үҙләштерелгән мосолман исемдәре ҡушыу ҙа изге йолаға әүерелде. Улар исем-шәрифтәрен дөрөҫ итеп яҙа ла белә, иншалла.**

Тик шуныһы күңелде ҡыра: ҡайһы берәүҙәр, айырыуса оло быуын вәкилдәре, фамилияларын башҡортса дөрөҫ яҙмай, хатта яҙырға ла теләмәй. Һүҙ әлеге шул ғәрәп теленән ингән исемдәрҙән яһалған фамилиялар тураһында бара. Әйтәйек, *Яппаров, Мөхәррәмов, Харрасов, Саттаров, Ғәлләмов, Зиннуров* кеүек фамилияларҙа һүҙ уртаһында ҡуш тартынҡы ҡуймайынса, *Япаров, Сатаров, Зинуров* һ.б. тип яҙырға ғәҙәтләнделәр. Тағы ла *Садиҡов, Латипов, Фәтихов* тигән фамилиялар русса *Садыков, Латыпов, Фатыхов* булһа ла, башҡортсаһында "*и*" хәрефе яҙыла. Ә *Хисаметдинов, Шәмсетдинов, Ғәләүетдинов, Хәйретдинов, Ғилметдинов, Фәхретдинов* һ.б. шуның һымаҡ фамилияларҙа "*етдин*" ялғауы "*е*" менән яҙыла, руссаһындағы кеүек "*и*" хәрефе менән түгел. Шулай уҡ, *Мәүлет, Бәкер* исемдәрендә лә, уларҙан яһалған фамилияларҙа ла "*и*" яҙылмай.

Исем-шәрифтәрҙең руссаһындағы "*з*" хәрефе башҡорт телендә "*ж*" хәрефе менән яҙыла. Мәҫәлән: *Хазиев - Хажиев* ("*Хажи*" һүҙенән килеп сыҡҡан, ҡайһы берәүҙәр яҙғанса "*Хәзи*" түгел), *Мазитов - Мажитов, Сиразитдинов - Сиражетдинов* һ.б. Былар иң йыш осраған хаталарҙыр, моғайын.

*Ғариф, Зариф, Шәриф, Йософ* кеүек исемдәрҙән башҡортса фамилиялар былай яһала: *Ғарипов, Зарипов, Шәрипов, Йосопов.* Бер түрәнең бүлмә ишегендә атаһының исеме "*Ғәрип улы*" тип яҙылғайны. Ғәрип бит "*инвалид*" тигән һүҙ! Ә был кешенең атаһы - Ғариф.

Документтар менән эш иткәндә "*һ*" хәрефенән башланған һүҙҙәрҙә буталсыҡлыҡ, аңлашылмаусанлыҡтар йыш килеп сыға. Миҫал өсөн *Ибәтуллин, Идиәтуллин* тигән фамилияларҙы килтерергә мөмкин. Улар *Һибәт, Һиҙиәт* исемдәренән яһалған. Шулай уҡ *Сыртланов* фамилияһы башҡортса *Һыртланов* була, *Сырлыбаев - Һырлыбаев, Саубанов - Һәүбәнов, Сарбаев - Һарыбаев* һ.б. *Ғәфүров* фамилияһын ни өсөндөр *Ғафуров* тип яҙалар, *Юлбарыҫовты Юлбарисов* тиҙәр...

Фамилияларҙа "*ҡ*" урынына "*к*" хәрефе ҡуйыу ҙа осрай. Мәҫәлән, *Исхаҡов, Бикҡолов, Аҡкилдин* тип яҙыу дөрөҫ була. *Кузеев, Кусимов, Кучуков* башҡортса ошолай яңғырарға тейештер: *Күҙәев, Күсемов, Көсөков.*

*Мөьминшин* фамилияһында нәҙек айырыу билдәһе, *Ҡотләхмәтов* кеүек ҡушма исемдән төҙөлгәндәрендә (*Ҡотло+Әхмәт*) бер һуҙынҡы төшөп ҡалыуы тураһында бер мәҡәләмдә яҙып сыҡҡайным инде. Ә нигеҙендә нәҙек һуҙынҡылар булған фамилияларҙың ялғауы ла нәҙек була: *Исмәғилев, Йәмилев, Әминев* һ.б.

Элек "*я*" хәрефенән башланған фамилиялар күп була торғайны, хәҙер уларҙы төҙәтеп яҙа башланылар: *Янчурин - Йәнсурин, Янгужин - Йәнғужин* һ.б. *Еникеевтың Йәнекәев* икәне көн кеүек асыҡ. Шулай уҡ "*з*" хәрефенә башланған исем-шәрифтәрҙе лә төҙәтеп яҙыу фарыз: *Зианбердин - Ейәнбирҙин, Зиганшин - Йыһаншин, Зигануров - Йыһаннуров.* Исемдәр башҡортса яңғыраһа, бигерәк матур була икән! Йыһандың нуры - шәп бит! Мәғәнәһе лә аңлашылып тора. Исемдәрҙең мәғәнәһен аңламау ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәлдәргә килтереүе ихтимал. Телевидениелағы бер тапшырыуҙа исемдәр тураһында һүҙ барғайны, шунда *Маһифәрүәз* (халыҡса әйтелеше - *Майпәрүәз*) тигән иҫ киткес матур исемдән "мой паровоз" тип көлдөләр. Ә бит ул фарсы телендәге "*ай*" һәм "*бәхетле*" һүҙҙәренән яһалған.

Боронғо исемдәрҙе яңыса, беҙҙең телгә хас булмағанса ҡулланыусылар бар: *Камила - Камилла, Бибисара - Сара* (баҫымды беренсе ижеккә төшөрөп әйтәләр). Күренеүенсә, бында баҫымды дөрөҫ ҡуймайҙар. Башҡорт һүҙҙәрендә, шул иҫәптән исемдәрҙә лә, баҫым француз телендәге кеүек һәр ваҡыт һуңғы ижеккә төшә, хатта баш ватып торорға ла түгел. Шуға күрә, мәҫәлән, *Сәлихов* тигән фамилияла баҫымды тәүге ижеккә ҡуйыу дөрөҫ булмай: руссаһында ла, башҡортсаһында ла баҫым "*и*" хәрефенә төшә. Исем-шәрифтәребеҙҙе боҙмайынса, саф башҡортса әйтәйек, яҙайыҡсы, милләттәштәр!

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА.**

✓ *Шығай ағинәйҙәре ауылдың "Хоҙай беҙҙе ҡатын итеп яратҡан" исемле тамаша әҙерләй. Уның маҡсаты - йәш быуын ҡатын-ҡыҙҙарының булмышына үтеп инә барған сит-ят, йәмһеҙ ҡылыҡтарҙан ҡотолорға ярҙам итеү.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ИҘӘНГӘ ТӨШКӘН РИЗЫҠТЫ... ашарға яраймы?

■ Нью-Йорктағы Иешива-университеты тикшеренеүселәре раҫлауынса, ғаилә традицияларын күҙәтеү балаларҙың тормошта үҙ урынын табыуына, яҡшы уҡыуына йоғонто яһай. 2001 йылда тыуған балалары булған 8550 ғаиләне күҙәтеп, ғалимдар ошондай һығымтаға килгән. Өйҙә ғаилә менән бергә ултырып ашау, бергәләшеп китаптар уҡыу, спорт ярыштары ҡарау баланың физик һәм эмоциональ сәләмәтлегенә нигеҙе булып тора. Атай йәки әсәй менән йырҙар йырлаған бала мәктәптә дуҫтарҙы тиҙерәк таба, яҡшы баһалар ала. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Элиза Мюниц белдереүенсә, өйҙә балаға тейешле кимәлдә иғтибар бүленһә, баланың үҙенә ышанысы арта, ул үҙен яҡлаулы тоя, был саҡта ул яҡшыраҡ өлгәшә.

■ Шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы,сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

■ Инглиз ғалимдары ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргән: иҙәнгә төшкән ризыҡты ашарға яраймы? Бирмингем университеты микробиологтары раҫлауынса, иҙәндә ризыҡ 5 минуттан аҙыраҡ ятһа, ашарға ярай. Эксперимент үткәреүҙә төрлө ҡатламдар ҡулланылған: ламинат, балаҫ, паркет. Ғалимдар ниндәй ваҡыт эсендә бактерияларҙың ризыҡҡа үтеп инеүен тикшергән. Асыҡланыуынса, ризыҡ иҙәндә оҙаҡ ятмаһа, уны әле ҡулланырға ярай. Шулай ҙа бында иҙәндең бысраҡлығы, унда ниндәй бактереялар булыуы, шулай уҡ аҙыҡтың унда күпме ятыуы мөһим.

■ АҠШ ғалимдары раҫлауынса, беҙ дуҫтарҙы тауышына ҡарап һайлайбыҙ икән. Ғәҙәттә, уларҙың тауышы беҙҙекенә оҡшаған була. Белгестәр әйтеүенсә, теге йәки был кешенең тауышына хас акустик эффекттар танышҡан саҡта үҙенсәлекле сигнал булып тора. һәр кешенең тауышында билдәле бер ноталар күҙәтелә. Әгәр ҙә ошондай уҡ ноталар башҡа кешенең тауышында яңғырап китә икән, ул шунда уҡ дуҫ кеүек ҡабул ителә.

■ Белгестәр раҫлауынса, бер минут көлөү бер сәғәт спорт менән шөғөлләнеүгә тиң. Был ваҡытта яурын, күкрәк, ҡорһаҡ мускулдарына көсөргәнеш төшә, шуға кәүҙәгеҙ матур булһын, тиһәгеҙ, йышыраҡ көлөгөҙ. Көлөү йөрәк өйәнәгенән дә һаҡлай икән. Табиптар белдереүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусы кешеләрҙең 40 проценты ошо уҡ йәштәге һау кешеләргә ҡарағанда аҙыраҡ йылмайған һәм көлгән. "Беҙ көлөү йөрәкте нисек һаҡлай икәнен белмәйбеҙ, әммә нервы-психик көсөргәнеш ҡан тамырҙарын нормала тотоусы эндотелийҙың боҙолоуы менән бәйле икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Нервылар ҡаҡшауы һәм пессимизм организмда май йыйылыуға, артерияларға холестерин ултырыуға, ә улар үҙ сиратында йөрәк өйәнәгенә килтерә", - ти белгестәр.

*АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО*

**Шишмә тау-таштар араһынан үҙенә юл ярған кеүек, халҡыбыҙҙың күңел талабы заманалар бик ауыр, ҡатмарлы булған хәлдә лә рухты һаҡлап ҡалыр сара-юлын тапҡан. Һуңғы арала әүҙемләшеп киткән ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ҡорҙары ла ошо бурысты үтәй тип әйтергә була. Белорет районының Шығай ауылы мәҙәниәт йорто директоры Сәғирә Шәрәфетдинова ойоштorған "Аҡтамыр" ағинәйҙәр ойошмаһы, мәҫәлән, өс-дүрт быуын ҡатын-ҡыҙҙарҙы берләштереп, кис ултырыу, халҡыбыҙҙың онотолоп барған ҡул эштәрен, мәҫәлән, кейеҙ баҫыу йолаһын тергеҙеү, ейән-ейәнсәрҙәрҙе лә ошо шөғөлдәргә өйрәтеү эшен бик дәррәү башлап ебәргәйне. Асы ауылында иһә хакимиәт башлығы Фәрхәнә Сәлимйәнова ауылдың абруйлы ағинәйҙәре менән "Йома сәйе" тип аталған йәмле сараға нигеҙ һалды. 2012 йылда Баймаҡ районында булып үткән ағинәйҙәр йыйынынан һуң районыбыҙҙың Шығай, Үткәл, Хөсәйен, Аҙналы, һуңғараҡ Сосновка, Рысыҡай, Сермән ауылдарында "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмалары барлыҡҡа килде.**

# АҒИНӘЙЛЕК - ҠАРТЛЫҠ БИЛДӘҺЕ ТҮГЕЛ,

## ағинәйлек - рухиәт билдәһе

Былтыр Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаиләне, балалыҡты, әсәлекте һәм атайлыҡты яҡлау буйынса комиссия рәйесе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева иһә Шығай ауылы мәҙәниәт йортона районыбыҙ ауылдарының ҡатын-ҡыҙҙарын йыйып, "Ағинәйҙәр ҡоро"ноң бурыстарын аңлатып, шул осорға эш башлаған ойошмалар рәйестәренә таныҡлыҡ тапшырып, фатихаһын биреп китте һәм был осрашыу башҡа ауылдар ағинәйҙәрен дә дәртләндерҙе, әүҙемләштерҙе. Шығай ауылы ағинәйҙәре "Аҡтамыр"ға яңы һулыш өрҙө. Ағинәйҙәрҙең халыҡ араһында тағы ла киңерәк ҡолас менән эшләү мөмкинлеген, уның ҡеүәтен күреп, тиҙ арала элекке уҡытыусы-ветерандар, социаль өлкәлә эшләп хаҡлы ялға киткәндәр улар тирәләй тупланды. "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Динә Ҡанафина һәр ағзаның мөмкинлегенән, ауылда, мәктәптә, халыҡ араһында тотҡан роленән сығып, эш планы төҙөнө. Баштан уҡ ағинәйҙәр ҡоро эшенә аҡһаҡалдар, ауыл хакимиәте, мәктәп коллективы, уҡыусылар, депутаттар, участка милиционеры йәләп ителде. Әйткәндәй, Шығайҙа "Аҡһаҡал ҡоро" ла эш башланы. Етәксеһе итеп ғүмерен балаларға белем биреүгә арнаған остаз, оҙаҡ йылдар мәктәп директоры вазифаһын башҡарып, хаҡлы ялға сыҡҡан Нәҙерғәле Асылгужин һайланды. Ҡорға ауылдың иң әүҙем һәм абруйлы ир-егеттәре Инсаф Ҡанафин, Хәбир Шиһапов, Флүр Мөхәмәтдинов, Рәмил Шәрәфетдинов, Исмәғил Әбүталипов инде.

Шығай ағинәйҙәренең һәм аҡһаҡалдарының ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендәге ҡайһы бер эштәрен барлап үтәйек әле. Ауыл старостаһы Инсаф Ҡанафиндың тырышлығы, ярҙамы һәм ағинәйҙәрҙең теләге менән ябыҡ торған мәсетте асып, йылытып, Мәүлит байрамы үткәреүҙән башланы быйылғы эштәрен шығайҙар. "Һуғым ашы" йола байрамына күрше Үткәл, Хөсәйен ағинәйҙәрен саҡырҙылар. Борон-борондан малға таянып, мал менән һыйлы-аҡлы йәшәгән халҡыбыҙҙың был йолаһы - үҙе бер яҡты байрам. Шығайҙар уны урын-еренә еткереп, күргәҙмәгә ҡуйырлыҡ юғары кимәлдә үткәрҙе. Ошонда уҡ ағинәйҙәрҙең һәр береһенә йөкмәтелгән айырым бурыстары, һәр береһенең тәғәйен эше тураһында мәғлүмәтле булдыҡ. Берәүҙәр ерлектәге милли кейем өлгөләрен һаҡлау, тергеҙеү эшен ихлас алып бара, һәр урында башҡорт кейемдәренең, ундағы биҙәк-тамғаларҙың мәғәнәһен аңлатып йөрөй. Кемдәрҙер онотолған йолаларҙы иҫкә төшөрә, икенселәр экологик өмәләр ойоштороу мәшәҡәтен үҙ иңенә ала, өсөнсөләр мәктәптәрҙә балалар менән эскелектең яман афәте тураһында йәнле әңгәмә ҡора. Ғөмүмән, Динә Ҡанафина, Ғинуара Сөнәғәтова, Сәмсиниса Мырҙабаева, Мәрйәмә Хажина, Алмабикә Ғәлиуллина, Нурбикә Ҡанафина, Рифа Йәғәфәрова, Рәшиҙә Нуретдинова, Земфира Фәсхетдинова, Эльвира Сәйфхова, Сәғирә Шәрәфетдинова кеүек иң әүҙем, иң зыялы ағинәйҙәр балалар баҡсаһына ла, ауыл ҡарттарына ла, буйҙаҡ егеттәргә лә ҡағылған бөтә мәсьәләләргә иғтибар үҙҙәренә алып, ҡулдарынан килгән ниндәйҙәр бурысты атҡарырға тырышалар. Бына әле Шығай ағинәйҙәре ауылдың дүрт быуын 88 өләсәйе, ейән-ейәнсәрҙәре ҡатнашлығында "Хоҙай беҙҙе ҡатын итеп яратҡан" исемле тамаша әҙерләй. Уның маҡсаты - йәш быуын ҡатын-ҡыҙҙарының булмышына үтеп инә барған сит-ят, йәмһеҙ ҡылыҡтарҙан ҡотолорға ярҙам итеү, ғаиләлә хөкөм һөргән именлектең дә, ямanлыҡтың да башында ҡатын-ҡыҙ тороуын, әсә мөхәббәтенең ҡеүәтен, атайҙарҙың ғаиләләге урынын, йәмғиәттәге баһаһын, сабыйҙарыбыҙға мәғәнәле башҡорт исемдәре ҡушыуҙың әһәмиәтен аңлатыу - бына ошо етди мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшмәксе улар йыйында. Шулай уҡ яҡын арала "Рәхмәт һиңә, Һыу!" акцияһы, "Башҡорт бейеүҙәре" конкурсы, "Ҡарға бутҡаһы", шулай уҡ Аҙналы ағинәйҙәрен саҡырып, "Кәкүк сәйе" йола байрамдары ойоштормаҡсылар. Ә 14 майҙа иһә шығайҙар Белорет һәм башҡа райондарҙан килгән ҡунаҡтарға кейеҙ баҫыу йолаһын күрһәтәсәк. Әле шул байрамға әҙерләнеп, ағинәйҙәр, балалар, ейәнсәрҙәр кистәрен йөн тетә. Ил иртәгәһен уйлаған, ғаиләләр именлеген хәстәрләгән Шығай ауылы аҡһаҡалдары һәм ағинәйҙәре ауыл биләмәһендә иғлан ителгән "Айыҡ ауыл" конкурсын ғәмәлгә ашырыуға ла ең һыҙғанып тотондо, иҫерткес эсемлектәр һатҡан, эскелек сиренә бирелгән ғаиләләргә рейдтар яһай башланы.

Шығайҙа хәҙер бер генә сара ла ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ҡатнашлығынан башҡа үтмәй. Мәҙәниәт тармағы ошондай йәмәғәтселәре менән көслө булған кеүек, йәмәғәт ойошмаларының да тик мәҙәниәт тармағы



Белорет ағинәйҙәре.

хеҙмәткәрҙәре менән берлектә генә эшләй ала икәнен дә билдәләп үтергә кәрәк. Юҡһа, ҡайһы бер урындарҙа ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ҡорҙарын ҡатын-ҡыҙҙар, ветерандар советтарына, мәҙәни усаҡтарға ҡапма-ҡаршы ҡуйырға тырышыусылар ҙа табыла. Күмәкләгән - яу ҡайтарған, тигәндәй, бөтә ошо ойошмалар бер төптән егелеп эшләгәндә генә һөҙөмтә була икәнен аңлау кәрәк таһа. Тағы ла өҫтәп шуны әйтеп үтәйек әле. Ҡайһы бер ауылдарҙа ағинәйҙәр ҡороноң тик йәштәрҙән тороуы ниндәйҙер бәхәстәр, ризаһыҙлыҡтар тыуҙыра. Дөрөҫөн генә әйткәндә, ауылда ағинәйҙәр бер ваҡытта ла күп булмаған. Бәғзе бер ауылдарҙа көндөҙөн шәм яндырып эҙләһәң дә, бер өлкән ҡатын-ҡыҙҙы таба алмаҫһың, сөнки күптәре ҡартайып сирләй, бәғзеләренең һаулығы шәп булып та, йәмәғәт эшенә барымы юҡ. Былдай осраҡта ни эшләргә? "Ағинәйлек - ул ҡартлыҡ билдәһе түгел, ағинәйлек - рухиәт билдәһе, ул абруй, ул дәрәжә. Әгәр ҙә үҙ артынан башҡаларҙы эйәртә, эшләтә, үҙ һүҙен һанлата ала икән, 30 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙы ла беҙ ағинәй тип атай алабыҙ", тигәйне ағинәйҙәр ҡорондағы сығышында Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы Янбаева. Тимәк, беҙ дөрөҫ сырамытҡанбыҙ: Үткәл ауылындағы төп ағинәй әле йәш кенә өләсәй - ауыл фельдшеры Айһылыу Йомағужина. Уның ойоштороу һәләте лә бар, ололар менән аралашырға ла ярата, яңынан-яңы идеялар табып, ағинәйҙәрен яңы эштәргә әйҙәп, саҡырып ҡына тора. Иң мөһим сифаты, әлбиттә, битарафлыҡтан азат булыуы. Күршеләрҙе ҡунаҡҡа саҡырыу йолаһын да нәҡ үткәлдәр башлап, өлгө күрһәтте. Шулай уҡ оло кешеләрҙең өйҙәренә барып, унда сәй табыны ойоштороп, хәл-әхүәл белешеп, һөйләшеп, күңелдәрен күреүҙе лә бер ғәҙәткә индерҙеләр. Был ғәмәлдәр балалар өсөн дә ҙур һабаҡ. Былтыр һыу баҫыуҙан зур ҡазаға тарыған ғәбдүктәргә, балалар йортонда тәрбиәләнеүселәргә, яңғыҙ ҡалған оло кешеләргә ярҙам ойоштороуҙа Үткәл ағинәйҙәре беренселәрҙән булып инициатива күрһәтте. Йөндән аяҡ кейемдәре баҫыу йолаһын тергеҙеүгә ихлас ҡушылдылар. Быйыл иһә "Иң матур баҡса", "Иң күркәм йорт" конкурстары ойошторасаҡтар.

Хөсәйен ауылының "Ағинәйҙәр ҡоро"на ауыл старостаһы Рәйлә Иҫәнғужина етәкселек итә. Хөсәйендәр сатнама һыуыҡ көндө тышта усаҡ яғып, боронғоса ике ҡаҙан аҫып, күршеләрен - Шығай ағинәйҙәрен тәжрибә уртаҡлашыу маҡсатында ҡунаҡҡа саҡырҙы. Бәләкәй генә ауыл сәхнәһен тултырып, ике ауылдың ағинәйҙәре "Йәгеҙ әле, ағинәйҙәр!" ярышында ҡатнашты. "Ярыш" тигән һүҙ тура ла килмәй был танһыҡ тамашаға. Зиһен эйәһе халҡыбыҙҙың тапҡыр теллелеген, матур һүҙле, кинәйәле әйтемле, аҡыллы таҡмаҡлы, йомаҡлы, изгелек сәскән әкиәтле булыуын иҫбатлаусы күңелле бер дәрес булды ла ҡуйҙы ул. Ауылдың иң оло йәштәге ағинәйҙәре - 79 йәшлек ҡул оҫтаһы, нурлы йөҙлө Сафия Ҡәләмова, 81 йәшлек ағинәй, тәрән фекерле, матур телле Камила Дәүләтбаевалар Шығайҙан Динә Ҡанафинаға ҡапма-ҡаршы боронғо таҡмаҡтарҙы әйтешә башлағайны, түҙеп кенә тор, тигәндәй... Онотолған мәҡәлдәрҙе әйтешеү, бик һирәк осрай торған, халыҡсан ғына йомаҡтар ҡойошоу, борон заман булған мәҙәк хәлдәрҙе һөйләү, бәйеттәр көйләү, үҙҙәре уйлап сығарған ҡобайырҙар әйтеү - был ярыштың мәғәнәһен тәрәнәйтте. Ун бала әсәһе, иң оҫта хужабикәләрҙең береһе Сәйбә апай Мәхмүтованың бүлә-бүәләсәрҙәре өләсәйҙәренең йырлап-бейеп сығыш яһауын ҡарай-ҡарай тәмле йоҡоға талды. Осрашыу бишбармаҡ менән һыйлау, һуғым ашын һоғондорошоу, Сәйбә апайҙың күпереп торған буҙаһынан тәм итеү аралаш күңелле һөйләшеү, фекер алышыу менән тамамланды. Залда ултырған уҡыусылар өсөн генә түгел, ҡунаҡтарға ла боронғолоҡҡа йоғоноу, ҡаҙандар аҫып ҡунаҡҡа саҡырышыу йолаһы, табын артында кәңәш-төңәш итеп ултырыу ифрат ныҡ оҡшаны. Бына ҡайҙа йәшеренеп, онотолоп, мүкләнеп ятҡан ул халҡыбыҙ хазиналары, тип уйланыҡ күңелгә ятышлы боронғобоҙҙоң осмоттарын, осҡондарын күреүебеҙгә һөйөнөп. Әгәр ҙә "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошторолмаһа, был саралар үтер инеме лә, ауылдарыбыҙ халҡы шулай дәррәү күтәрелер инеме икән?

Аҙналы ауылы ағинәйҙәре лә быйыл әүҙемлек күрһәтеп, изге эштәргә орлоҡ һалды. Ауылдың тарихын байҡап, билдәле кешеләрҙең, һуғышта һәләк булғандарҙың, һуғышта ҡатнашҡандарҙың исемлеген барлап, китапханала альбом төҙөүҙе тарих уҡытыусыһы Айһылыу Сәмсетдинова үҙ өҫтөнә алды. Ауылдың оло инәйҙәре менән мәктәптә дин тәртиптәре, "Өләсәйҙәр уйнаған уйындар", ҡул эштәре, йортто, ихатанды, урамды тәртиптә тотоуҙың мөһимлеге тураһында аңлатыу дәрестәре ойошторҙолар. Күмәкләшеп, йыйылып, юлда һәләкәткә осрап, оҙаҡ ваҡыт дауаханала ятҡан ауылдаштарының ғаиләһенә, балаларына ярҙам күрһәтте Аҙналы ағинәйҙәре.

Сосновка, Рысыҡай ауылдарында "Ағинәйәр ҡор"ҙары һуңлабыраҡ ойошторолһа ла, улар ҙа байтаҡ сараларҙа ҡатнашырға өлгөрҙө, кейеҙ баҫыу йолаһын тергеҙеүҙә ҡатнашалар. Сосновка мәҙәниәт йорто директоры Земфира Аҙнабаева, художество етәксеһе Рима Йосопова, китапхана мөдире Ғилә Фәтҡуллина ҡатын-ҡыҙҙарҙы ағинәйҙәр ҡорона йәлеп итеп, бик уңышлы эшләйҙәр. Ағинәйҙәр ҡорона етәксе итеп элекке уҡытыусы, мәҙәниәт йортонда "Хужабикә" оҫталыҡ түңәрәген алып барыусы, йыраусы Рима Йосопова һайланды.

Бер ҡараһаң, һанап сыҡҡан саралар әллә ниндәй ҙур эштәр ҙә түгел кеүек. Шул уҡ ваҡытта ата-бабаларҙан ҡалған рухи ҡиммәттәрҙе үҫеп килгән йәш быуынға бөртөкләп тапшырыу, цивилизация уңайлыҡтарына күмелеп, юҡҡа сыға барған ата-бабалар кәсебен тергеҙеү, ерҙе, илде, телебеҙҙе һөйөргә, һаҡларға, яҡларға өйрәткән йолаларыбыҙға йән өрөп ебәреү, сит-ят һүҙҙәрҙән йәберһетелгән әсә теленең, сүп-сарға бата барған урман-болондарҙың, шишмә-йылғаларҙың сафлығы, ауылдаштарҙы эскелек һаҙлығынан йолоп алыу өсөн көрәшкә ҡушылыусыларҙың эше бөйөк түгелме ни!..

**Зилә АБЗАЛОВА,**
**Белорет районы һәм ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының "Ағинәйҙәр ҡоро" рәйесе.**

*ҺАБАҠТАР*

# ҠАРТЛЫҒЫНДА КҮРМӘМ, ТИМӘ...

**Һикһәнде артмаҡлаған Сабир бабайҙың көнө таяҡҡа уҡ ҡалмаһа ла, хәрәкәттәре һүлпән, хәтере насарайған. Ике ҡатыны вафат булды, өсөнсөгә лә бер әбей менән йәрәшкәйне, уныһы күпкә түҙмәй, ҡайтып китте. Яңғыҙлыҡтан йонсоған бабай улына йәшәргә күсте.**

Ярай әле, ошо бер улы ауылда төпләнде, ситкә китергә ризалашмаҫ ине. Килене аш-һыуға оҫта, өйө таҙа. Улар икеһе лә көндөҙ эштә йөрөй, бар йыуанысы - телевизор ҡарау инде бабайҙың. Бик тә бик күңелһеҙ булып китһә, күршеһендәге ҡарт янына инә, йәш айырмаһы ҙур булыуға ҡарамаҫтан, ике буйҙаҡ бер-береһен аңлай.

Бөгөн бына пенсия тараҡкан көн. Ҡарт-ҡороноң, бигерәк тә уларҙың аҡсаһына өмөт иткән балаларының көтөп алған көнө. Сабир бабай ҙа пенсияһын көтөп ала ла, үҙенә аҙыраҡ ҡалдырып, килененә бирә. Балалары автокредит түләй, шуға аталары хәленән килгәнсе ярҙам иткән була. Был юлы ғына бабайҙы әллә шайтан ҡотортто, әллә үҙе ҡоторҙо. Пенсияһын алыу менән улының өйөнә ҡайтмай, магазинға юлланды. Ейәндәренә прәник, чупа-чупстар, үҙенә иһә... аҡбаш менән колбаса һатып алды. Тик аяҡтары өйгә түгел, ә элекке күршеһенә алып килде. Бер ҙә өйләнмәйенсә, яңғыҙы ҡартайған Рәфис менән оҙаҡ ултырҙы улар. Бер түгел, ике аҡбаш бушаттылар. Ҡулына аҡса эләккәс, Рәфис йүгереп магазиндан тәм-том ташыны. Көнө буйына эсеп әлйерәгән бабай күршеһендә йоҡлап ҡалды. Өсөнсө көнгә генә ҡайтты улының йортона. Атаһын улы асыуланып ҡаршыланы.

- Ҡайҙа булдың?

- Үҙем беләм... - тип ҡырт киҫте Сабир бабай. - Һәр аҙымымды әйтеп йөрөйөммө ни?..

- Пенсияң ҡайҙа?

Бабай кеҫәһенә тығылғайны, унда бер йөҙлөк һәм тиндәр генә тороп ҡалған икән. Быны күреп ярһыған улы атаһына һуғып ебәрҙе. Әллә эштән асыуланып ҡайтҡан, әллә йылдар буйы йыйылған хистәренә ирек бирҙе, бигерәк аяуһыҙ ҡыланды. Бер туҡтауһыҙ атаһының башын стенаға бәрҙе, бабай дивандан иҙәнгә йығылғас, типкесләй башланы, бар донъя ҡанға тулды. Бер һүҙ ҙә әйтмәне, бары тик ыңғырашты Сабир бабай. Урамдан килене инмәһә, ни менән бөтөр ине был хәл.

- Ай Алла, үлтереп кенә ҡуйма инде, төрмәгә китәң бит,- тип илап килеп йәбешеп кенә иҫенә килтерҙе ирен Әнисә. Ҡанға туҙған ҡайныһын түгел, яралы йыртҡыстай ярһыған ирен, үҙен йәлләй ине ҡатын.

- Атай, мин һинең балаң, тыуҙырғанһың икән - ҡара! - йән асыуы менән ыҫылданы ла улы, ишекте шарт ябып сығып китте.

Оҙаҡ ятты Сабир түшәктә. Килене үҙенсә дауалап маташты. Ярай әле, күрше-күләндән береһе лә бабайҙың хәлен белергә инмәне. Белмәгәндәре лә яҡшы булды, балаларының яманаты таралыр ине. Түшәктән торһа ла бөтә нәмәгә битараф хәҙер Сабир бабай. Баштараҡ күгәргән йөҙөн көҙгөнән күреп, үҙенән үҙе ҡурҡҡайны, бер айҙан үҙен дә, улы менән киленен дә онотто. Улары бабайҙың аҡсаһын хәҙер үҙҙәре ала, автокредиттарын да түләп бөттөләр...

Йәй етеп, тәбиғәт матурланғас, Сабир бабай өйҙән сығып китеп, юҡ булды...

**Римма ӘХМӘТЙӘНОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Ҡыйыулыҡ

Элеонора Рузвельт: "Һәр саҡ, ҡурҡыуҙың йөҙөнә ҡарап һәм уны еңеп сығып, һеҙ өҫтәмә көс, ҡыйыулыҡ һәм ышаныҫҡа эйә булаһығыҙ. Шунан һуң инде үҙегеҙгә: "Мин ошо хәүеф аша үттем, тере ҡалдым һәм артабан барам", - тип әйтә алаһығыҙ. Мотлаҡ рәүештә үҙегеҙҙе нимәгә һәләтһеҙ тип уйлайһығыҙ, шуны эшләргә кәрәк", - тип раҫлаған.

Һеҙ ҡурҡыныс янағанда нимә эшләйһегеҙ? Уны шулай кәрәк тип ҡабул итәһегеҙме? Һәр саҡ көсөргәнешле хәл-торош һеҙҙең көндәлек тормошоғоҙҙоң бер өлөшө булып торамы? Әллә һеҙ бер ваҡытта ла ҡурҡыу хисен кисереү талап ителмәгән үҙегеҙ өсөн булдырылған уңайлылыҡ зонаһына кире инеүгә өҫтөнлөк бирәһегеҙме? Үҙегеҙҙә ҡыйыулыҡ рухын үҫтереү һәм уны тормошта ҡулланыу өсөн нисек үҙгәрергә тейешһегеҙ?

**Өйгә эш**

**Үҙегеҙҙә ҡыйыулыҡты үҫтереү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:**

● **Ауырлыҡтарҙы батырҙарса ҡаршылағыҙ.** Үҙегеҙҙә ҡыйыулыҡ үҫтереү өсөн генә булһа ла йәшеренеп ятҡан ерегеҙҙән сығып, хәүефле берәй нәмә эшләгеҙ. Парашюттан һикерегеҙ. Аудитория алдында сығыш яһағыҙ. Пьесала роль уйнағыҙ. Шәп ағымлы йылғала һал менән ағығыҙ. Текә ҡаяға үрмәләгеҙ. Нимә эшләүегеҙ мөһим түгел, иң мөһиме - ысын ҡурҡыныс, хәүеф менән йөҙгә-йөҙ осрашыу.

● Күптәр ҡул аҫтында эшләүселәр, туғандар, эш буйынса коллегалар менән конфронтация барлыҡҡа килеүҙән ҡурҡа. Әгәр шундай хәл килеп тыуа икән, ошо кеше менән оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай һөйләшегеҙ. Әммә уны түбәнһетмәгеҙ. Уға бөтөн дөрөҫлөктө "мөхәббәт" аша әйтегеҙ.

● **Ҙур аҙым яһағыҙ.** Бәлки, ошоға тиклем үҙегеҙҙең карьерағыҙҙа ҡырҡа боролош эшләргә ҡурҡҡанһығыҙҙыр. Күңелегеҙ менән эш урынын алмаштырырға тейешлегегеҙҙе йәки күптән уйлап йөрөгән эшҡыуарлыҡҡа тотоноroғоҙҙо тойһағыҙ, әле ошо аҙымды яһарға ваҡыт. Барлыҡ хәл-торошто айыҡ баһалар өсөн ваҡыт бүлегеҙ. Үҙегеҙ ышанған кешеләр менән һөйләшегеҙ, кәңәшләшегеҙ. Әгәр быңдай аҙым, ысынлап та, мөһим икән - ул аҙымды яһағыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 5 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 "Дело ваше..." (16+).
13.35 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Остров Крым" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "В наше время" (16+).
16.10 "Они и мы" (12+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Переводчик". Драматический сериал. 1-я серия (12+).
22.30 "Война и мифы" (12+).
23.30 "Великая война. "Ржев" (12+).
24.00 Ночные новости.
00.40, 03.05 "Брестская крепость". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.35, 07.35, 08.34, 11.25, 14.20, 17.30, 20.30 "Вести-Башкортостан".
09.00 "За победу - расстрел? Правда о матче смерти". Док. фильм (16+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия".Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Джамайка". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Ветер в лицо". Мелодрама (12+).
00.45 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.45 "Девчата" (16+).
02.25 "Батальоны просят огня". Сериал.

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
